ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 июнь (һөтәй) 2022

№23 (1013)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тамырым - башҡорт!**



5

**Хәҡиҡәт яҡлы булайыҡ!**




6

**Изге ниәттәр менән берләшәйек,**
һәр осраҡта ла маҡсат ысулды аҡлай



8-9

**Ижад итә, эшләй...**
һәм башҡаларҙы ла рухландыра



13

**ТВ-программа** 14

***АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!***

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 июндән 16 июнгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## *ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

***Уҡыусыларыбыҙ әленән-әле, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһына бер аҙ милли колорит та өҫтәү тураһындағы хыялыбыҙ ҡасан тормошҡа ашыр икән, тип мөрәжәғәт итә. Ошо хаҡта һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Ирек ЯЛАЛОВ, РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советында Башҡортостан Республикаһынан сенатор:*** Өфө буйлап ашыҡмай ғына, тирә-яғыңды байҡап йәйәүләп йөрөһәң, унда бик күп милли колорит күрергә мөмкин. Ә беҙ, ғәҙәттә, ҡайҙалыр ашығабыҙ, баш күтәрмәй аяҡ аҫтына ҡарайбыҙ йәки машина йөрөтөп, иғтибарҙы ситкә йүнәлтмәйбеҙ. Әммә бөгөнгө мегаполисты бынан 20-30 йыл элек булған ҡала менән сағыштырһаҡ, яҡшы яҡҡа бик күп үҙгәрештәр булғанын күрербеҙ, сөнки милли колорит - ул киң төшөнсә һәм үҙ эсенә милли биҙәктәрҙе лә, скульптураларҙы ла, милли ризыҡтарҙы ла, туған телде лә, билдәле шәхестәрҙең исемдәрен мәңгеләштереүҙе лә ала.

Әгәр милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәленән Еңеү паркына тиклем Октябрь проспекты буйлап үтһәк, шәхестәргә ҡуйылған һәйкәлдәрҙе лә, уларҙың исемдәре ҡушылған урамдарҙы ла, йорттар фасадына төшөрөлгән милли биҙәктәрҙе лә, урамдарҙағы клумбаларҙа сәскәләрҙән эшләнгән этник элементтарҙы ла күрербеҙ. Шулай уҡ теләүселәр баш ҡала буйлап экскурсияла ла йөрөй ала, унда инде Өфөнөң иҫтәлекле урындарын ғына күреп ҡалмайһың, ә милли ризыҡтарҙан да ауыҙ итергә була. Шөкөр, беҙҙә хәҙер шундай этно-гастротурҙар ҙа бар, тиҙ тукланыуҙың милли селтәре лә үҫешә. Яңы торлаҡ комплекстар, мәктәптәр һәм башҡа социаль объекттар төҙөлгәндә үк уларға стилләштерелгән этник биҙәктәр элементтары индерелә.

Эйе, власты әрләү, һүгеү еңел, шул уҡ ваҡытта халыҡ мәнфәғәтендә эшләнгән яҡшы эштәрҙе лә күрергә кәрәк. Үҙ сиратымда мин ҡала мэры булып эшләгән осорҙа халыҡ легендаһына бәйле йырлаусы "Ете ҡыҙ" фонтанын эшләтә алыуым менән ғорурланам. Бөгөн ул туристарҙы ғына түгел, ҡала халҡын да, ҡунаҡтарҙы ла үҙенә саҡырып тора. Шулай уҡ ШОС һәм БРИКС саммитына тип төҙөлгән донъяла танылған ҡунаҡханалар селтәренә лә милли орнаменттар өҫтәнек. Шуға күрә мин "Хыялыбыҙ ҡасан тормошҡа ашыр икән?" тигәнгә аныҡ яуап бирә алмайым - күрергә теләһәгеҙ, күрерһегеҙ, сөнки күрергә теләгән кеше республиканың баш ҡалаһында бөгөн дә милли колорит барлығын шәйләй. Шул уҡ ваҡытта был йүнәлештә тағы ла күп эштәр башҡараһы ла бар.

## *БАШ ҠАЛАМ*

# ҺӨМҺӨРӨ ҠОЙОЛОП ЙӨРӨГӘНДӘРМЕ?

## Өфөлә ундайҙар юҡ!

**Үҙең ғүмер иткән ҡала тураһында ситтән килгән кешенең ниндәй фекерҙә булыуы ҡыҙыҡ. Даими рәүештә ошонда йәшәүебеҙ арҡаһында баш ҡаланың ниндәйҙер үҙенсәлеген, әһәмиәтлеген һәм кәмселеген күрмәйбеҙ. Ә сит кешегә бөтә нәмә яңыса һәм ул беҙҙең кеүек өҫтөнлөклө генә фекер йөрөтмәй, ә тәфсирләп ҡарай, бөтәһенә лә иғтибарын бүлә. Шулай, Һамар ҡалаһынан килгән хеҙмәттәшем Игорь Вяткиндың Өфөбөҙ тураһында әйткән фекерҙәрен гәзит уҡыусыларға ла еткергем килә.**

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

✓ *Бөгөн стилләштерелгән проекттар менән баш ҡатыралар. Халыҡ, шулай икән, шулай булырға тейеш икән, ти ҙә ҡуя. Проекттарҙы һайлап алыу тауыш биреү юлы менән башҡарыла. Уның ғәҙелме, юҡмы икәнен берәү ҙә күҙәтмәй.*



*БАШ ҠАЛАМ*

# ҺӨМҺӨРӨ ҠОЙОЛОП ЙӨРӨГӘНДӘРМЕ?

## Өфөлә ундайҙар юҡ!

**(Башы 1-се биттә).**

- Өфөгә, ғөмүмән, Башҡортостанға килергә яратам. Эшем буйынса йыш булырға тура килә һәм һәр саҡ һеҙҙең республикаға командировкаларҙы көтөп алам.

Поездан килеп төшкәс тә беренсе сиратта башҡорт аштары тәҡдим иткән ашханаға юлланам. Һеҙҙәге кеүек тәмле итле ашты бер ҡайҙа ла бешермәйҙәр. Ҡамыр аштары бик оҡшай, шуға үҙем генә ашап ҡалмайым, ә өйҙәгеләргә лә күстәнәскә алам. Әлбиттә, Һамарҙа ла шул уҡ өсбосмаҡ, сәк-сәкте алып була, ләкин тәме, сифаты буйынса улар Өфөнөкөнән күпкә ҡалыша.

Мин үҙем булған һәр төбәктең дә мәҙәни, тарихи асылын сағылдырған урындарҙа булырға яратам. Мәҫәлән, Өфөләге бөтә музейҙарҙа ла булдым. Башҡортостандың милли музейын биш тапҡыр ҡарап сығыуға өлгәштем. Өфө халҡы ошондай бай экспонатлы музейҙары булыуы менән ни тиклем бәхетле икәнлектәрен аңлайҙарҙыр, тип ышанам. Ундағы төрлө-төрлө экспозициялар, тарихи, географик һәм башҡа күп төрлө өлкәне үҙ эсенә алған айырым бүлмәләр - барыһы ла бай мәғлүмәти сығанаҡ.

Тимер юл вокзалы тирәһе оҡшай. Хәҙер тирә-яғын матурлап ҡуйғас, айырыуса күркәмләнде. Вокзалдың тау менән йылға араһында урынлашыуы үҙе бер әһәмиәтле күренеш. Әгәр ҙә тимер юл вокзалы янында йылғала пароходтар өсөн туҡтау урыны эшләп, шунда тиклем матур юл булдырһалар, Өфөнөң үҙенсәлекле бер күренешенә әйләнер ине, тип уйлайым.

Ағиҙел яры буйын төҙөкләндереп, заманса итеп эшләп ҡуйыуҙары йылға буйына әллә күпме кешене алып төштө. Айырыуса киске уттар янған ваҡытта Салауат Юлаев һәйкәле эргәһенән мең төрлө төҫтәр менән балҡыған яр буйын ҡарап тороу күңелле. Әгәр ҙә ошондай уҡ идеяны тимер юлы вокзалы янындағы яр буйына күсерһәләр һәм тормошҡа ашырһалар, өфөләрҙең тағы бер яратҡан урыны барлыҡҡа килер ине.

Һәр килеүемдә үҙәктән ситтә урынлашҡан биҫтәләргә барып, күреп ҡайтырға тырышам. Һәр төбәктең дә ысын тормошон күрһәтеүсе урындар - улар нәҡ ошондай эшселәр биҫтәләре. Үҙәк урамдарҙы ялтыратып тотһаң да, биналарҙы йылына өс төҙөкләндерһәң дә, ситтәге райондар бысраҡ һәм ремонт күрмәгән булһа, тотош ҡала тураһындағы тәьҫораттар төҫһөҙләнә. Өфө биҫтәләре буйлап сәйәхәтемдән сығып фекер йөрөткәндә, ҡала хакимиәтенең алдында эшләнәһе эштәр байтаҡ ҡына. Айырыуса йорт ихаталарына инеп сығырға саҡырам етәкселәрҙе.

Еңеү паркына айырым туҡтап үтмәйенсә булмай. Бында тән дә, күңел дә ял итә. Һиллек, саф һауа, таҙалыҡ - барыһы ла ял итеүселәр өсөн. Ғөмүмән, Өфө үҙенең йәшел ҡала тигән статусын лайыҡлы йөрөтә.

Тағы ла шуны әйткем килә - һеҙҙә халыҡ алсаҡ. Урамда кемдең йөҙөнә ҡараһаң да һөмһөрө ҡойолоп йөрөгән кеше күренмәй. Һәр һорауға асыҡ итеп яуап бирәләр, хатта үҙе белмәһә, икенсе кешене туҡтатып һорап, барыбер яуап табып еткереп ҡуялар. Ҡалағыҙ ҙа матур, кешеләрегеҙ ҙә күркәм.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*КӨНАУАЗ*

**Бөгөнгө мәғариф системаһы 30-40 йәшкә тиклемге быуындар яҙмышында уҫал "уйын" уйнаны, тип иҫәпләүселәр бар. Ысынлап та, ҡатмарлы һәм буталсыҡ был осор - 90-сылар хаҡында "юғалған быуын" тип әйткәндәрен дә ишеткән бар. Осорона, мәленә күрә, ориентирҙар буталған, үткәндәр инҡар ителгән, киләсәккә әле йүнәлеш билдәләнмәгән, бөтөн өлкәләрҙә лә яңырыу, үҙгәреш талап ителгән йылдар ине ул.**

# ҮҘЕҢДЕКЕНӘН БАШ ТАРТЫУ...

## көрсөккә терәй яҙманымы?

Яңыса эшләргә, йәшәргә теләк булған хәлдә лә, йәмғиәттәге күп хәл-ваҡиғаларҙың аңлашылып етмәүе, шулай тип аталған "ельцинизм"дың илде иҡтисади-сәйәси генә түгел, рухи-ижтимағи ҡиммәттәр көрсөгөнә килтереп терәүе, әлбиттә, йәш быуын тәрбиәһе һәм уларға белем биреү өлкәһендә лә сағылмай ҡалманы. Ғәжәп, ләкин Рәсәйҙең тәүге президенты сифатында Ельциндың тәүге указы мәғарифты үҫтереү буйынса саралар хаҡында була. Ләкин ундағы күрһәтмәләр декларатив йөкмәткеле булараҡ, үтәлмәйенсә ҡала. Мәҫәлән, сығарылыш уҡыусылары һәм студенттарҙың, йыл һайын уҡырға, квалификацияһын күтәрергә һәм стажировкаға 10 мең йәш кешене сит илгә ебәрергә тигән пунктты ҡыуанып ҡаршылауы бойомға ашмай, буш вәғәҙә генә булып ҡала. Шулай булмайса, мәғариф ҡайғыһымы - "хәтәр йылдар" яманаты сыҡҡан ул осорҙа ниҙәр генә булып бөтмәне: ГКЧП, СССР тарҡалыуы, ҡырағай баҙар шарттары - Гайдар реформаһына күсеү, ваучер тарихы - хосусилаштырыу, Конституция реформаһы, Чечня һуғышы, туҡтауһыҙ "премьерҙар парады", дефолт... Иҫәбенә сығырлыҡ түгел!



Шул йылдар статистикаһынан мәғлүм булыуынса, 1989 йылда урта мәктәпте тамамларға йыйыныусыларҙың ни бары 10 проценты ғына белем алыуға ҡыҙыҡһыныуын белдерә, башҡаларҙы тормош-көнкүреш ҡайғыһы борсой. Ҡыҙғанысҡа күрә, 2003 йылда Рәсәйҙең Болонья (Европа илдәренең берҙәм мәғариф моделе Италиялағы 1088 йылда асылған иң боронғо Болонья университеты хөрмәтенә шулай аталған) системаһына ҡушылыуы ла белем биреү өлкәһендә революция яһамай, сөнки, ҡаршылар булыуға ҡарамаҫтан, әҙер Европа моделен беҙҙең ерлеккә күсереп "ултыртыу" менән эш бөтмәне шул. Ныҡлап уйланылмаған, Рәсәй мәғарифы үҙенсәлектәрен, шарттарҙы, уҡытыусы кадрҙар потенциалы кеүек мәсьәләләрҙе иҫәпкә алмайынса, ашығыбыраҡ хәл ителә был ҡарар. Бәлки, шуғалыр ҙа, формаһы менән Болонья системаһын ҡабатлаған мәғариф өлкәһе йөкмәтке яғынан бер ниндәй ҙә үҙгәреш кисермәй, уға күсеүҙең әллә ни фәтүәһе булмай. Киреһенсә, бакалавриат бөткәндәргә "недоучка" тигәнерәк ҡараш нығына, был иһә эш биреүсене

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Уҡыусыларыбыҙ әленән-әле, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһына бер аҙ милли колорит та өҫтәү тураһындағы хыялыбыҙ ҡасан тормошҡа ашыр икән, тип мөрәжәғәт итә. Ошо хаҡта һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Әлфәт ҠОБАҒОШОВ, скульптор, "Аҡбуҙат" һәйкәленең авторы:*** Был хыял бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаясаҡ һымаҡ булып китә. Егерме-утыҙ йыллап төрлө проекттар тәҡдим итәм, бары тик үҙемдең көсөм, инициативам, рухым менән генә бер нисәһен тормошҡа ашырыу бәхетенә өлгәштем. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, төрлө конкурстар ойоштороусы кешеләр ҙә, проекттарҙы һайлап алыусылар ҙа башҡорт донъяһынан алыҫ тора. Шуға күрә халыҡ тарихына, уның мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә бағышланған проекттарҙы үткәреүе ауыр. Мәҫәлән, райондарҙа үҙ эшенде күрһәтеү һәм ҡайҙалыр ҡуйыу еңелерәк, сөнки унда беҙҙе аңлаған кешеләр бар. Былтыр Бөрйән районының Йылҡысыҡҡан күле буйында ҡуйылған "Аҡбуҙат" һәйкәлен генә алғанда ла, минең идеяны үҙгәртеп, унан әллә нимәләр эшләргә булып киткәйнеләр. Әммә был эште Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-производство үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин үҙ ҡулына алып ҡына еңеп сыҡтыҡ. Ә былай, ҡайҙа аҡсалы эш, шунда уҡ ситтәр килеп тығыла башлайҙар - иң мөһиме, уларҙың тематикаһы сит, ҡараштары ла бөтөнләй икенсе. Халыҡҡа яңылыш йүнәлеш биреп, башын бутайҙар ҙа, шул эштәрҙе тормошҡа ашыралар.

"Урал батырға һәйкәл кәрәк", тигән тәҡдимде уҙған быуаттың 90-сы йылдарында уҡ иң элек күтәреп сыҡҡайныҡ. Әммә ул ваҡытта ҡаршылыҡтар күп булды, ул - тормошҡа ашмаҫлыҡ проект, сөнки уға ҡаршы көстәр күп. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт полктары яугирҙары - "Төньяҡ амурҙары" темаһын күтәрһәң, шунда уҡ һикереп сығып, казактарҙы, башҡаларҙы килтереп тыға башлайҙар. Идеяны ваҡлайҙар, бүлгесләйҙәр, уның әһәмиәтен юҡҡа сығаралар.

Бөгөн стилләштерелгән проекттар менән баш ҡатыралар. Халыҡ, шулай икән, шулай булырға тейеш икән, ти ҙә ҡуя. Проекттарҙы һайлап алыу тауыш биреү юлы менән башҡарыла. Ә тауыш биреүҙе кем ойоштора? Уның ғәҙелме, юҡмы икәнен берәү ҙә күҙәтмәй, белмәй ҙә. Шуға был мәсьәлә шикле булып ҡала. Йомғаҡлап нимә тип әйтә алам: башҡорт халҡы мәнфәғәтен алға һөрөүселәр булмағанда, республикаға исем биргән милләткә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрмәйәсәк, баш ҡалала ла милли колорит юҡ һәм ул булмаясаҡ та.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда быйыл "Өфө диалогы" халыҡ-ара төркөмөндә ҡатнашыусыларҙың осрашыуын үткәреү идеяһы күтәрелә һәм республика Башлығы Радий Хәбиров Федерация Советының 2023 йылда Өфөлә Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең унынсы юбилей форумын уҙғарыу тәҡдимен яҡлауын белдерҙе.

✓Торатау шиханы башына экоһуҡмаҡ булдырыу маҡсатында уға көнсығыштан һәм төньяҡтан менеү өсөн баҫҡыс эшләү быйыл көҙгә тамамланасаҡ. "Баҫҡыстар ҡуйыу уникаль тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡларға ярҙам итәсәк һәм күренеште ҡапламаясаҡ. Туристар өсөн дә уңайлы. Шиханда техника юҡ, баҫҡыс ҡулдан йыйыла", - тип хәбәр итә Республика менән идара итеү үҙәге. Шулай уҡ иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: хәҙер Торатау итәгендә һабантуйҙар уҙғарылмаясаҡ.

✓Башҡортостанда йәшәүселәрҙе бәләкәй дала һәм тау йылғаларында һыу кимәленең күтәрелеү ихтималлығы тураһында иҫкәртәләр. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ янында Ағиҙел йылғаһы - 10 сантиметрға, Өфө эргәһендә 8 сантиметрға ташҡан. "Бер туҡтауһыҙ ямғыр яуыуға бәйле 9-14 июндә республикала йылғаларҙа һыу кимәленең кинәт күтәрелеүе һәм гидротехник ҡоролмаларға ағымдың артыуы көтөлә. Түбән урындарҙа Йүрүҙән, Әй, Эҫем, Инйәр, Ләмәҙ йылғаларының һәм бәләкәй һыу ағымдарының һыубаҫар туғайҙарына сығыуы ихтимал", - тиелә Башгидрометүҙәк белдереүендә.

✓Көйөргәҙе районы Яҡшембәт һәм Яҡут ауылдарында хәмер һатыу бөтөнләй тыйыла, тип хәбәр итте парламенттың матбуғат хеҙмәте. Июндә яҙғы сессияның йомғаҡлау ултырышында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тейешле закон ҡабул итергә йыйына.

✓Салауат районында "Салауат йыйыны-2022" фольклор байрамы 11 июндән 18-нә күсерелде, быға һауа торошо сәбәпсе. Ул район һабантуйы менән бергә ойошторола, тип хәбәр иттеләр муниципалитет хакимиәтенән. Байрам программаһында - тирмәләр конкурсы, "Шайтан-Көҙәй ырыуы тураһында легенда" театрлаштырылған тамашаһы, район ауылдарының үҙешмәкәр сәнғәт коллективтары конкурсы, көрәш, спорт һәм халыҡ уйындары, ат сабыштары. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана.

һағайта һәм улар, тәбиғи, магистратура тамамлағандарға өҫтөнлөк бирә. Был үҙ сиратында студенттарҙың ата-әсәләренә лә тәьҫир итә һәм улар балаларын, теләйме ул, юҡмы - уҡыуҙы магистратурала дауам итергә мәжбүрләй. Ғөмүмән, был осорҙа мәктәп тамамлаусы балалар алдында "кем булырға?" түгел, ә "ҡайҙа уҡырға инергә?" тигән һорау тора.

Шуныһы ла бар: БДИ һөҙөмтәләре вуздарға күп кешегә юл асты, шуға күрә күңеле теләгән түгел, ә балл һандары еткән ергә инеү яғын ҡараны күптәр. Һөҙөмтәлә ана шул "балл еткән" вузды тамамлап та, алған белеме буйынса эшләмәгән йәштәр күбәйеп китте. Юғары белемле һатыусы ла, официант та, башҡаһы ла бер кемде лә аптыратмай ҙа ине инде. Юғары белем биреү өлкәһен ике кимәлгә бүлеү, шулай итеп, мәғариф сифатын яҡшыртыуға ла, уны үҫтереүгә лә булышлыҡ итмәй. Ә бына Болонья системаһының бер ыңғай яғы - студенттарға уҡыуҙарын сит илдәрҙә дауам итеү мөмкинлеге - төрлө сәбәптәр менән бик аҙҙар өлөшөнә тәтене.

Дөрөҫ, илдәге вуздарҙың бөтөнөһө лә яңы өлгөгә эйәрә һалманы, үҙ дәрәжәһен һәм урынын белеп, традицион тәртиптә эшләүен дауам итте. Мәҫәлән, Рәсәйҙең төп юғары уҡыу йорто булған М.В.Ломоносов исемендәге университет ректоры Виктор Садовничий баштан уҡ был системаға ҡаршы булды һәм специалитетты яҡлап, күп тапҡырҙар сығыш яһаны. "Тап специалитет фундаменталь белгестәр әҙерләп сығарырға ярҙам итә", - ти ул. Дәүләт Думаһы вице-спикеры Петр Тостой ҙа Болонья процесынан сығып, белем биреүҙең традицион рус системаһына ҡайтыуҙы хуплай. РФ мәғариф һәм фән министры Валерий Фальков яңыраҡ "Коммерсант" гәзитенә әңгәмәһендә Рәсәйҙең ике кимәлле Болонья системаһынан сығырға йыйыныуы хаҡында белдерҙе һәм был моделде "артта ҡалған этап" тип атаны. Болоньяға ингән осорҙа ҡаршылар булған кеүек үк, әлеге ваҡытта унан сығыу мәсьәләһендә лә ҡаршылар етерлек. Был йәһәттән улар төрлө илдәр араһында студенттар менән алмашыу традицияһының туҡталыу ихтималлығы айҡанлы борсолоу белдерә. Уның ҡарауы, Рәсәйгә теләктәш илдәр менән был өлкәлә лә хеҙмәттәшлек дауам итәсәк, моғайын.

Һәр хәлдә, рәсәйҙәрҙең 66 проценты үҙебеҙҙең "специалитет-аспирантура" классик системаһына кире ҡайтыу яҡлы , ә һорау алынған һәр 10-сы респондент быға ҡаршы булыуын белдерә. Шуныһы ла бар: традицион системаға ҡайтыу яҡлыларҙың йәше 45-тән үткән һәм улар күптән инде дипломлы белгестәр. Вуз студенттарының иһә 44 проценты шулай уҡ ике кимәлдәге "бакалавриат - магистратура" формаһына ҡаршы, 29 проценты Болоньяла ҡалыу яҡлы. Ә бына 11 класты тамамлап, вузға инергә йыйыныусы йәштәрҙең ата-әсәләре бер тауыштан тиерлек (93 процент) үҙебеҙҙең специалитет системаһына кире күсеүҙе хуплай. Бында ла уйланырға урын бар: юғары белем алыу мәсьәләһендә һаман да балалары өсөн ата-әсә хәл итә икән, бөгөн бының тик файҙаға ғына булыуы ла бар. Юғиһә, күҙәтеүселәр әйтмешләй, либераль баҙар иҡтисады илдәге етештереү ҡеүәттәрен юҡҡа сығарыу сигенә килтереп терәне. Шул сәбәпле инженер һөнәрҙәренә уҡытыу ҙа һүлпәнәйҙе, уларға ихтыяж кәмене. Бында күптәр әлеге лә баяғы "болонка"ны ғәйепләй. Бөгөн иһә санкция баҫымы аҫтында тергеҙелә башлаған ҡеүәттәргә тап әлеге онотолоп барған инженер-техник белгестәр кәрәк тә инде. Ә уларҙы, әлбиттә, үҙебеҙҙең белем биреү традицияларында һыналған специалитет әҙерләйәсәк. Традицияларҙан да, ниндәйҙер яңылыҡ күренгән системаларҙан да ҡырҡа баш тартыу ҙа, ҡайһыһындыр зым-зыя инҡар итеү ҙә берҙәй кимәлдә үҫешкә тотҡарлыҡ ҡына ул; шуларҙың иң кәрәклеһен, уңышлыһын алып файҙалана белеүҙә бөтөн эш. Хаталар аша тормош беҙҙе шуға өйрәтә түгелме?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# БЛОГЕРМЫ? ЖУРНАЛИСМЫ?




**Интернет менән бергә йәшәйешебеҙгә блогер төшөнсәһе лә килеп инде. Блогер, тимәк, интернетта үҙенең блогын алып барыусы, башҡа авторҙарҙың бер йүнәлештәге материалдарын үҙ блогына алып ҡуйыусы, уларға ҡарата үҙенең фекерҙәрен белдереүсе. Һуңғы ваҡытта сәйәси тема, башҡа тармаҡтар буйынса махсус йүнәлеш алып барыусы блогерҙар шул тиклем күбәйҙе һәм шул тулҡында, нисектер, журналист һөнәре ситкә тибелеп ҡалған һымаҡ тойолдо. Урынлы һорау тыуа: мәғлүмәт донъяһын интернет, социаль селтәрҙәр яулаған һымаҡ, журналисты ла блогерҙар алмаштырҙымы? Юҡ, әлбиттә, ни өсөн тигәндә:**

Атамаһы уҡ әйтеп торғанса, блогерҙар, ашнаҡсылар кеүек, "ҡаҙан болғатып" тороусылар ғына. Блогерҙар теге йәки был тема, йүнәлеш буйынса төрлө авторҙарҙың ҡапма-ҡаршылыҡлы, ыңғай йәки кире, йәки бөтөнләй инҡар иткән мәҡәләләрен, сығанаҡтарын дөйөм контекстан айырып алып, үҙенең блогына йәбештереүсе генә. Уларҙың аныҡ үҙ позициялары ла булмауы бар, йә булмаһа, дөйөм контекст ҡанунына эйәреп, позициялары ла туҡтауһыҙ үҙгәреп тороуы мөмкин. Сөнки блогер үҙ контентын күберәк уҡыусы, лайк ҡуйыусы йә комментарий яҙыусы йәлеп итеү маҡсатынан, йәғни күберәк аҡса эшләү маҡсатынан сығып барлыҡҡа килтерә. Ә инде, белеүебеҙсә, аҡса эшләүгә ҡоролған идея һәр ваҡыт позитив йә гуманлы була алмай. Сөнки күпселек интернет ҡулланыусылар иң беренсе нәүбәттә негатив хәбәрҙәргә, "көйөк еҫе сыҡҡан" мәғлүмәткә иғтибар итеүсән. Был осраҡта блогерҙар ҡара көстәргә хеҙмәт итә башлай. Йәмғиәттең тарҡалыуына ла алып килә бындай эшмәкәрлек.

Блогер үҙе яҙғандарға ниндәй комментарийҙар буласағын, уларҙың уҡыусы иғтибарын ҡайһы яҡҡа алып китеренә бер ниндәй ҙә гарантия бирә алмай. Әлбиттә, хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, тип тә әйтәләр. Әммә блогер комментарийҙарҙан сығып һығымталар яһауҙы үҙенең бурысы һанамай. Күп осраҡта тап ошо комментарийҙар яланында йөҙ йыртыуҙар, кеше баҡсаһына таш ырғытыуҙар, янауҙар һ.б. күңелһеҙ күренештәр блогерҙың битарафлығына эленеп тороп ҡала. Шулай булғас, блогерҙы мәғлүмәт яланына "миналар" һалыусы менән дә сағыштырып булыр ине. Зауыҡтар менән бик оҫта манипуляция яһаусы блогерҙар ҙа бар хәҙер. Журналист иһә бындай хәүефтән азат, ул үҙенең автоном ижад емеше, продукцияһы өсөн тулыһынса яуаплы.

Блогерлыҡ шоу-бизнес кеүек, ул дөйөм иғтибар үҙәгендә. Әммә күпселектең фекерен, инаныуын кәрәкле бер йүнәлешкә көйләү генә хәҡиҡәттең барлығын инҡар итмәй. Хатта ки бер кеше генә инанған хәлдә лә хәҡиҡәт хәҡиҡәт булыуҙан туҡтамай, тиҙәр. Мәғлүмәт донъяһында хәҡиҡәт өсөн яуаплылыҡты блогерҙан түгел, журналистан, хәбәрсенән, баш мөхәррирҙән талап итәләр. Тап шуның өсөн дә интернет донъяһында теге йәки был тема буйынса ниндәй генә ҡыҙыу бәхәстәр бармаһын, халыҡ барыбер ҙә журналисҡа, гәзит-журналға, радио һәм телевизор аша тапшырылған мәғлүмәткә ышана. Сөнки әйткән һүҙ, яҙған мәҡәлә, телерадиотапшырыу өсөн яуаплылыҡ тойғоһо ла бар журналиста. Нимә генә тимә, Интернет селтәрендәге мәғлүмәт кешеләрҙең инаныуына әйләнер тип ышанып булмай. Минеңсә, бының сере әлеге лә баяғы яуаплылыҡталыр. Бәхәсһеҙ, ул яуаплылыҡты уҡыусы ла тоя.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Уҡыусыларыбыҙ әленән-әле, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһына бер аҙ милли колорит та өҫтәү тураһындағы хыялыбыҙ ҡасан тормошҡа ашыр икән, тип мөрәжәғәт итә. Ошо хаҡта һеҙ ни уйлайһығыҙ?***

***Юлдаш ЙОСОПОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:*** Минеңсә, тәү сиратта беҙ, башҡорт йәмәғәтселеге, ҡуйыласаҡ объекттар, проекттар буйынса үҙебеҙҙең бер нисә вариантыбыҙҙы булдырырға һәм ошо йүнәлештә эшмәкәрлек алып барырға тейешбеҙ. Мәҫәлән, ҡайһы бер парктарҙа батырҙарыбыҙ, эпостарыбыҙ менән бәйле тематика булһа, бик һәйбәт булыр ине. Йәғни тотош парк бер темаға, бер концепцияға ҡорола ала. Икенсенән, эште ҡәҙимге ҡала паркында ниндәйҙер милли элементтар индереүҙән башларға мөмкин. Мәҫәлән, ҡырсынташтан ниндәйҙер орнамент һалырға була. Балалар майҙансыҡтарын биҙәгәндә лә милли биҙәктәр элементтары индерергә мөмкин. Ошо ике - береһе дөйөм концептуаль йәһәттән тәрәнәйтелгән, икенсеһе милли элементтарҙы ҡулланыу йүнәлешенән башлаһаҡ та, ҙур һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин.

Икенсе яҡтан, йәмәғәт киңлеге булған, халыҡ күпләп йөрөгән, кеше йыйылған парктарҙы нисек ҡулланабыҙ? Уларҙы үҙебеҙҙең файҙаға ҡулланып, ниндәйҙер айырым, мәҫәлән, "Самауырлы ритайым" булһынмы ул, "Балалар һабантуйы"-мы, ниндәйҙер бисҭәнең һабантуйымы - тап башҡорт саралары ойошторғанда, яҡшы буласаҡ. Минеңсә, был эш тулыһынса Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайы эшмәкәрлеге планына инергә тейеш һәм быйыл йәй ошо юҫыҡта ниндәйҙер эш башланыр тип ышанам. Баш ҡалала, мәҫәлән, Рауил Бикбаев исемендәге парк бар. Ул районда әүҙем башҡорт зыялылары йәшәй, бары тик уларҙы берләштерергә, әүҙемләштерергә кәрәк. Шулай уҡ Дим районының "Яркий" бисҭәһендә һәм башҡа бисҭәләрҙә, яңы парктарҙа үҙебеҙҙең сараларҙы үткәреү зарур. Мәсьәләгә ошо ике яҡтан ҡараһаҡ һәм ошо йәһәттән эшмәкәрлек алып барһаҡ, бәлки, ҡаланың йөҙөн үҙебеҙ теләгәнсә үҙгәртә алырбыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтарҙың ун тапҡырға артыуы тураһында иҫкәрттеләр. Ҡоро үлән, ҡоро-һары яндырған өсөн, шул иҫәптән ағастарҙан янғынға ҡаршы һыҙат менән бүленмәгән участкаларҙа штрафтар түбәндәгесә: граждандарға элекке өс-дүрт мең урынына 30-40 мең һум штраф янай; вазифалы кешеләргә - элекке 15-20 мең урынына 30-50 мең; юридик берәмектәргә - 150-250 мең һум урынына 300-500 мең.

✓Республика вуздары яңы уҡыу йылында абитуриенттар өсөн 13 465 бюджет урыны әҙерләгән. Бюджет урындары йылдан-йыл арта. 2018-2019 уҡыу йылында улар 9992 генә ине. 2023-2024 йылдарҙа 13 749 бюджет урыны планлаштырыла. Популяр йүнәлештәр араһында - мәғариф һәм педагогика (2371 урын), геология, тау, нефть-газ эше (925 урын), машиналар эшләү (870, информатика һәм иҫәпләү техникаһы (869), медицина (807). 2023-2024 уҡыу йылында Рәсәйҙә 590 меңдән ашыу студент бушлай уҡый башлай. Тиҙ арала импортты алмаштырыу өсөн һөнәрҙәргә баҫым яһала, һанлы иҡтисад өсөн әҙерләүгә айырым иғтибар бүленә.

✓Ауыл хужалығында 30 йыл эш стажы булған, ауыл ерендә йәшәгән һәм эшләмәгән пенсионерҙарҙың, страховка пенсияһына өҫтәп, билдәләнгән 25 процент күләмендәге түләүҙе алырға хоҡуғы бар. Түләү тәғәйенләнгәндән һуң пенсионер ҡалаға йәки ҡала биләмәһе булып киткән ауылға күсһә лә, быйылғы йылдан алып пенсияға был өҫтәмә түләү һаҡлана. Билдәләнгән түләү күләмен тәғәйенләүгә хоҡуҡ биргән вазифалар һәм специальностар исемлегенә 500-ҙән ашыу һөнәр инә.

✓Тупланма пенсия страховка пенсияһына ҡарағанда алдараҡ тәғәйенләнә. Ҡатын-ҡыҙҙарға уны - 55 йәштән, ә ирҙәргә 60 йәштән ала башларға була (йәки тулыһынса бер тапҡыр алырға мөмкин). Шуныһы мөһим: тупланма пенсия алыу страховка түләүҙәре күләменә йоғонто яһамай. Уны алыу өсөн түбәндәге кешеләр мөрәжәғәт итә ала: 2002 йылдан 2013 йылға тиклем рәсми рәүештә эшләгән; үҙ теләге менән пенсия иғәнәһе түләгән; әсәлек капиталын пенсия булдырыуға йүнәлткән.

ҠЫҪҠАСА

# ТЫЙЫЛҒАН УРЫНДА...

**Башҡортостанда билдәләнмәгән урындарҙа урамда сауҙа иткән йәки көнкүреш хеҙмәттәре күрһәткән өсөн штрафтарҙы ваҡытлыса ғәмәлдән сығарған закон көсөнә инде.** "Ҡағыҙә булараҡ, тыйылған урындарҙа пенсионерҙар үҙ баҡсаһында үҫтергән еләк-емешен, картуфын, төрлө әҙерләмәләрен һата. Был уларға аҙмы-күпме килем килтерә, ҙур ярҙам булып тора", - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Граждандарға, коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға, эшҡыуарҙарға, юридик берәмектәргә һәм уларҙың хеҙмәткәрҙәренә штраф һалынмай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда рөхсәт ителмәгән урындарҙа сауҙа иткән өсөн штраф граждандарға - 500-3000 һум, вазифалы кешеләргә - 20- 40 мең һум, юридик берәмектәргә 50-100 мең һум ине.

✓ **Башҡортостанда 2022 йылда "Иң яҡшы йыл табибы" конкурсының республика этабына йомғаҡ яһалды. Бөтәһе 27 номинацияла еңеүселәр һәм призерҙар билдәләнде.** Өфөнөң Ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһының балалар өсөн консультация-диагностика етәксеһе Наталья Сәмиғуллина республиканың иң яҡшы педиатры тип танылды. Иң яҡшы терапевт - Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының пульмонология бүлеге мөдире Гөлназ Грицаенко, иң яҡшы онколог - шул уҡ дауахананың онкология бүлеге мөдире Антон Сафонов, ә иң яҡшы хирург - Республика балалар клиник дауаханаһының нейрохирургия бүлеге мөдире Айрат Тимершин. Аҡъяр үҙәк район дауаханаһының терапия бүлеге мөдире Лира Хәбирова - иң яҡшы ауыл табибы, Республика стоматология поликлиникаһының ортопедия бүлеге мөдире Алик Ғәйнанов - иң яҡшы стоматолог, Салауат ҡалаһы дауаханаһының баш табибы Илшат Яппаров медицина ойошмаһының иң яҡшы етәксеһе тип танылды.

✓ **Балиғ булған сығарылыш уҡыусыларына ҡараусыһын юғалтыуға бәйле пенсия сентябргә тиклем һаҡлана.** Балиғ булған мәктәп тамамлаусылар ҡараусыһын юғалтыуға бәйле пенсияны 1 сентябргә тиклем алырға мөмкин. Юғары йәки урта махсус уҡыу йортона инғәндәрҙең дә аҡса алыуға хоҡуғы һаҡлана. "Российская газета" хәбәр итеүенсә, студенттарға уҡып бөткәнсе пенсия түләнергә тейеш. Статс-секретарь, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры урынбаҫары Андрей Пудов һүҙҙәренсә, законда бала колледжға йәки юғары уҡыу йортона инғәс, ҡараусыһын юғалтыу осрағы буйынса пенсия түләүҙе тергеҙеүҙең яйлаштырылған тәртибе ҡаралған: ул уны алыуын дауам итә, бының өсөн ғариза яҙырға кәрәкмәй. Закон 1 июндән көсөнә инә.

✓ **Башҡортостанда автомобилистарға машина алғандан һуң 10 көн дауамында дәүләт теркәүе үтмәйенсә йөрөргә рөхсәт ителде.** Был хаҡтағы документты республиканың Дәүләт Йыйылышы депутаттары Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа ҡултамғаға йүнәлтте. "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында ғәмәлдәге Кодексҡа ярашлы, ЮХХДИ-ла теркәлмәйенсә автомобиль юлға сығырға тейеш түгел ине. Хатта уны иҫәпкә ҡуйыр өсөн дә закон талаптарын боҙорға тура килде, сөнки теркәү үтмәгән транспорт сараһы менән идара итеү тыйылды. Бындай осраҡта ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре автомобиль эйәләренә дөғәү белдермәнә лә, был күренеште сикләү мөһим", - ти Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Бынан тыш, хәҙер машина һатыу менән шөғөлләнгән юридик шәхестәргә, эшҡыуарҙарға автомобилде, Рәсәйҙән ситкә сығарылған транспортты иҫәпкә ҡуйыу мотлаҡ түгел.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯРҘАМҺЫҘ ИТМӘЙБЕҘ



**8 июндә Луганск Халыҡ Республикаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров гуманитар автоколонна менән килтерелгән һәм Красный Луч ҡалаһында монтажланған асфальт заводы эшенә старт бирҙе.**

Сәғәтенә 60 тонна асфальт етештереү ҡеүәтенә эйә технологик комплекс Өфөнән 20 майҙа монтаж краны, битум һауыты һәм запас частар менән бергә оҙатылды. Бынан тыш, Луганск Халыҡ Республикаһына урындағы юлдарҙы тергеҙеүгә ярҙам итеү өсөн "Башкиравтодор"ҙың 25 хеҙмәткәре командировкаға килде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡала халҡын юл инфраструктураһын яңыртыу эштәре башланыуы менән ҡотланы. Йәйге миҙгелдә яңы комплекс Красный Луч юл селтәренең 170 километрлыҡ асфальт ҡатламын яңыртыуҙы тәьмин итергә тейеш. "Хәҙер ремонт эштәре тиҙерәк барыр, бөгөн Башҡортостандан килтерелгән асфальт заводын файҙаланыуға тапшырҙыҡ. Уны монтажлағанда белгестәребеҙ соҡорҙарҙы ямау менән шөғөлләнде. Завод эшләй башланы, мин ҡәнәғәтмен. Урындағы юлдарҙы тәртипкә килтереү өсөн ҡалаға ҙур күләмдә асфальт кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы Красный Луч ҡалаһында тәҙөләп яткан балалар майҙансығы урынында ла булды. Ул 12 июндә, Рәсәй көнөндә, асылырға тейеш. Социаль объектта эштәрҙе Башҡортостандан командировкаға ебәрелгән төҙөүселәр алып бара. Улар майҙансыҡҡа нигеҙ һалыуҙы тамамлап килә, һуңынан унда уйын ҡоролмалары һәм тренажёрҙар ҡуйыу ҡуҙаллана. Әйткәндәй, республикабыҙ төҙөүселәре 1 июндә ЛНР-ҙың Петровское ҡалаһында тағы бер балалар майҙансығын асты. Ул 450 квадрат метр майҙанды биләй, унда резина япма түшәлгән, ҡомташ, спорт снарядтары һәм Ишембайҙа етештерелгән 15 яҡтыртҡыс монтажланған.

Эш сәфәре барышында Башҡортостан делегацияһы Луганск Халыҡ Республикаһында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар генералы, Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатовҡа бюст асылыу тантанаһында ла ҡатнашты. "Штеровка ауылында, 1943 йылда генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов һәләк булған урындан алыҫ түгел комдивыбыҙға бюст астыҡ. Оҙаҡ йылдар урындағы халыҡ генерал һәм Башҡортостандың башҡа арҙаҡлы улдары ерләнгән туғандар ҡәберлеген тәрбиәләп тора, иҫтәлеген һаҡлай. Комдивка бюст асыу инициативаһы менән сығыусыларҙың барыһына ла рәхмәтлемен", - тине Радий Хәбиров. Делегация ағзалары бюст асылғандан һуң легендар комдивтың һуңғы алышы булған урынға сәскәләр һалды.

# МАҠСАТТАР БИЛДӘЛӘНДЕ

**Уҙған аҙнала Сибайҙа "Урал арьяғы" IV Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы үтте. Ул Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкциялар осорондағы яңы иҡтисади ысынбарлыҡ темаһына арналды.**

Сарала Рәсәй Федерацияһының 61 төбәгенән һәм 11 дәүләттән вәкилдәр ҡатнашты. Был - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың иҡтисадты үҫтереүҙең дөрөҫ йүнәлештә булыуын раҫлай, сөнки инвесторҙар ышаныслы партнерҙарҙы ғына һайлай. Стратегик эшләнмәләр үҙәге президенты Владислав Онищенко республиканың бизнес-йәмғиәт менән мөнәсәбәтенә юғары баһа биреп: "Төбәктәр бер нисә мәсьәләне бер юлы хәл итә - көйләү нормативтарын яйлаштыра, кеше ҡеүәтен үҫтереү менән ныҡлы шөғөлләнә, тармаҡтарҙың эшенә кластер индерә. Башҡортостанда барлыҡ йүнәлештәр буйынса ла комплекслы эшләйҙәр", - тине.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, йәҙәр йыл дауамында Рәсәйгә ҡарата бик күп санкциялар ҡулланыла, әммә уларҙан, киреһенсә, илдең иҡтисади яңырыуына булышлыҡ итә. Быны Милли рейтинг агентлығының генераль директоры Алина Розенцвет та һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Башҡортостандың юғары иҡтисади ҡеүәтен элек тә билдәләй инек, әммә пандемиянан һуңғы шарттар һәм сит ил санкцияларының көсәйеүе республиканың иҡтисади позицияларын нығытырға ярҙам итте".

Һөҙөмтәләргә килгәндә: ике көн дауам иткән инвестһабантуйҙа 27 килешеү төҙөлгән, шул иҫәптән 8 килешеү туранан-тура 7,13 миллиард һумлыҡ инвестиция һалыуҙы планлаштыра, ә 19 документ хеҙмәттәшлеккә юл аса. Дөйөм алғанда, киләсәктә республика иҡтисадына 107 миллиард һумлыҡ инвестиция киләсәк. Иң мөһим килешеү "ИнгФуд" предприятиеһы менән 4,9 миллиард һумға төҙөлгән. Сауҙа тармағында Евродеталь-сервис, Глобал Фуд Салауат-2 предприятиелары, Төркиәнең Nevco холдинғы менән 235 миллион һумлыҡ берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу килешеүҙә нығытылған. Республика Башлығы Рәсәй Ҡулланыусылар йәмғиәтенең үҙәк союзы менән Башҡортостанда кумәртәләп һатыу буйынса аҙыҡ-түлек баҙарын булдырыу һәм Башпотребсоюз ҡулланыусылар кооперацияһының иҡтисади һәм финанс хәлен үҫтереү буйынса хеҙмәттәшлек булдырыу тураһында килешеү төҙөгән. Экопродукт, РВМ Капитал агросәнәғәт комплексы предприятиелары, Учалы элеваторы һәм Төркиәнең Генезис Агро Трейд компанияһы араһында берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса төҙөлгән килешеү республика иҡтисадына 1,6 миллиард һум инвестиция һалыныуын күҙаллай.

# ҮҘМӘШҒҮЛДӘР ҺАЛЫМ ТҮЛӘЙ

**Башҡортостан Рәсәйҙең тәүге 19 төбәге иҫәбендә үҙ биләмәһендә "Һөнәри килемгә һалым" махсус һалым тәртибен үтәү буйынса эксперимент башланы. Быйыл дүрт айҙа республиканың йыйылма бюджетына һөнәри килемгә 85,1 миллион һумлыҡ һалым индерелгән, былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 2,2 тапҡырға күберәк.**

"Республикала махсус һалым тәртибе ғәмәлгә индерелеүгә 2,5 йыл үтте, эксперимент барышын уңышлы тип танырға кәрәк", - тине Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, финанс министры Лира Игтисамова. Билдәләнеүенсә, һөнәри килемгә һалымды тауар етештереп һатҡандар түләй. Шул уҡ ваҡытта уның хеҙмәт килешеүе төҙөгән хеҙмәткәрҙәре булмаҫҡа тейеш. Мәҫәлән, бындай йүнселдәргә маникюр оҫтаһы, водитель, репетитор, бала ҡараусы, сантехник, тәржемәсе, дизайнер, тегенсе, юрист йәки сараларҙы ойоштороусы инә. Шулай уҡ фатирына икенсе кешене индергән осраҡта ла һөнәри килемгә һалым түләргә мөмкин.

- Әле Башҡортостанда һөнәри килемгә һалымды 93 мең кеше түләй, шуларҙың 87,7 меңе - үҙмәшғүлдәр, 5,3 меңе - шәхси эшҡыуарҙар. Дәүләт уларға бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына күрһәтелгән кимәлдә булышлыҡ итеүҙе гарантиялай. Башҡортостандағы "Минең бизнесым" үҙәге ишектәре үҙмәшғүлдәр өсөн һәр саҡ асыҡ, - тине республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, республикала аҙна эсендә яуым-төшөмдөң айлыҡ нормаһы яуған. Ямғырлы һауа торошо, урыны менән боҙ-борсаҡ аҙна аҙағынаса һаҡлана.

✓Юл хаҡының 50 процентына тиклемен компенсациялау программаһы буйынса балалар лагерҙарына юлламалар һатыу 15 июндә тамамлана, тип хәбәр иттеләр Туризм буйынса федераль агентлыҡтан. Быйыл балалар өсөн кешбәк менән юллама һатып алған Рәсәй граждандарының һаны 2021 йыл менән сағыштырғанда икеләтә артҡан. Программала ҡатнашҡан лагерҙар 90 проценттан ашыуға тулған. Быйыл программала лагерҙар 1,5 тапҡырға күберәк - яҡынса 2,1 мең ойошма ҡатнаша.

✓Быйыл яҙ Башҡортостанда яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләк йыйылмаһы үҙгәрҙе. Хәҙер бүләккә һигеҙ әйбер: сумка, бәйләнгән комбинезон, башлыҡ, биләү, кофта, бәләкәй бала кейеме, янғыны иҫкәртеү приборы, һыйылған юрған бирелә. Сабыйҙар өсөн комплекттың бөтә компоненттары яҡшы сифатлы, Өфөнөң "Ағиҙел" предприятиеһында етештерелгән, тип белдерҙеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

✓Башҡортостанда торлаҡҡа хаҡ билдәле булды. 2022 йылдың беренсе кварталында Башҡортостанда беренсел баҙарҙа торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса хаҡы 91,3 мең һумға еткән, тип хәбәр итте республика статистиктары. Хаҡ уҙған йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда 7,8 процентҡа артҡан. Ул ваҡытта яңы йорттарҙа бер квадрат метр 71,8 мең һум торған. Быйыл беренсе кварталда икенсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 77,8 мең һум тәшкил иткән (4,2 процентҡа күберәк). Сағыштырыу өсөн: былтыр икенсел баҙарға бер "квадраттың" уртаса хаҡы 63,4 мең һум ине.

✓Башҡортостандың туристик ылыҡтырыу көсө арта. Әле ул Рәсәй төбәктәре араһында алдынғы 12 субъект араһында. Туристарҙы үҙенсәлекле тәбиғәт һәм үҫешкән шифахана-курорт базаһы ылыҡтыра. "Туризм. РФ" корпорацияһының башҡарма директоры Сергей Красноперов күҙаллауынса, 2030 йылға тиклем республикаға туристар ағымы ике тапҡырға артырға тейеш.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ТАМЫРЫМ - БАШҠОРТ!

**31 майҙан 7 июнгә тиклем Өфөлә "Тамырым - башҡорт" Төбәк-ара балалар-үҫмерҙәр форумы булып үтте. Уҡыусыларға этномәҙәни, граждандыҡ-илһөйәрлек тәрбиәһе биреүгә йүнәлтелгән был сара Силәбе, Ырымбур, Төмән, Свердловск, Ҡурған өлкәләренән һәм Пермь крайынан килгән 60 үҫмерҙе берләштерҙе.**



Башҡортостанда үткән был форумға путевкалар менән "Ғарипов уҡыуҙары" республика конкурсында, "Белем" төбәк-ара мәғариф фестивалендә, Башҡорт теленән халыҡ-ара диктантта һәм башҡа ижади ярыштар һәм олимпиадаларҙа еңеүсе балалар бүләкләнгәйне. Мәҙәни-мәғариф һәм donъяны танып-белеү программаһы сиктәрендә үҫмерҙәр республика музейҙары буйлап экскурсияла йөрөнө, Өфө театрҙарында спектаклдәр ҡараны. "Тамырым - башҡорт" форумы сиктәрендә шулай уҡ һөнәр һайлау йүнәлеше буйынса эш, Бөрйән районына "Шүлгәнташ" мәмерйәһен ҡарарға барыу, танылған башҡорт сәнғәт эшмәкәрҙәре, йәмғәт ойошмалары лидерҙары менән интерактив, "Тамыр" балалар телеканалы тапшырыуҙарын төшөрөүҙә ҡатнашыу кеүек саралар ойошторолдо. Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә иһә Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан килгән балалар баш ҡалабыҙҙа үткәрелгән "Арт-Ҡоролтай. Балалар" Икенсе мәҙәни форумда ла ҡатнашып өлгөрҙө. Балалар 8 көн буйына Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында йәшәне.

Форумдың ябылыу көнөндә унда ҡатнашыусылар республика Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Азат Бадранов менән осрашты. Ул балаларҙың кемеһе уҡыуын Башҡортостанда дауам итергә теләүе менән ҡыҙыҡһынды. Форум ҡатнашыусыларының күбеһе ҡулдарын күтәрҙе һәм Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡырға теләүҙәрен белдерҙе, малайҙар араһында Республика инженер лицей-интернатына килергә теләүселәр ҙә байтаҡ булып сыҡты. Азат Бадранов "Тамырым - башҡорт" форумында ҡатнашҡан бындай тырыш һәм маҡсатлы балаларҙың теләктәре тормошҡа ашасаҡ, тигән өмөт белдерҙе.

**- Һеҙҙең төбәктәрҙә, башҡорттар тығыҙ тупланып йәшәгән урындарҙа, беҙ тарихи-мәҙәни мираҫ үҙәктәре астыҡ һәм был институттың артабан үҫеш алыуына ышанабыҙ. "Тамырым - башҡорт" кеүек форумдарҙа беҙ 60 ҡына түгел, ә 500, хатта 1000 баланы ла ҡабул итә аласаҡбыҙ. Илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә тыуһағыҙ ҙа, Башҡортостан - ул һеҙҙең дә ватанығыҙ икәнде белергә тейешһегеҙ. Бында йәшәгән халыҡ менән үҙегеҙҙең рухи яҡынлығығыҙҙы, беҙҙе күп нәмәләрҙең бергә бәйләп тороуын, беҙҙең бөтәбеҙ ҙә тиң булыуыбыҙҙы, бында һеҙгә һәр саҡ шат булыуыбыҙҙы тойорға тейешһегеҙ, - тине беренсе вице-премьер.**

Балалар Азат Шамил улына Башҡортостанға был сәфәрҙәрендә нимәләрҙең оҡшауы хаҡында һөйләне, үҙҙәренең хыялдары менән уртаҡлашты. Мәҫәлән, Свердловск өлкәһе Белореченский ҡасабаһынан 13 йәшлек Ян Тимергәзиевтың Өфөгә тәү тапҡыр килеүе икән. "Минең әсәйем Силәбе өлкәһе Табын ырыуы башҡорто. Башҡортостанға бик килгем килә ине, был форум бит юҡҡа ғына "Тамырым - башҡорт" тип аталмай. Беҙ, балалар, бөтәбеҙ ҙә ныҡ дуҫлаштыҡ. Уларҙың күбеһе башҡорт телендә иркен һөйләшә икәнде күрҙем. Форум ярҙамында мин дә башҡорт телен өйрәнә башланым һәм иллегә тиклем һанарға ла өйрәндем. Өйгә ҡайтҡас, бөтәһенә лә Башҡортостан мәҙәниәте хаҡында һөйләйәсәкмен, ете быуын нәсел шәжәрәмде төҙөйәсәкмен", - тип һөйләне Ян Тимергәзиев.

14 йәшлек Азалия Талипова Силәбе өлкәһе Арғаяш ауылынан килгән, йырсы булырға һәм башҡорт эстрадаһында эшләргә хыяллана. Яратҡан башҡарыусыһы - Артур Туҡтағолов. Был артистың Арғаяштағы гастролдәре ваҡытында Азалия уның менән бергәләп йырлағаны ла бар икән. "Минә бында бик оҡшаны. Рәми Ғарипов исемендәге ошо Башҡорт гимназияһына уҡырға инергә теләйем. Бөгөн математика менән рус теленән имтихан тапшырҙым да инде. "Тамырым - башҡорт" форумы булмаһа, мин гимназия-интернат хаҡында белмәгән дә булыр инем", - ти Азалия Талипова.

Осрашыу һуңында Азат Бадранов балаларға легендар башҡорт осоусыһы Муса Гәрәев хаҡында китап бүләк итте һәм бергәләп фото төшкәндән һуң уларға туған республика менән бәйләнеште өҙмәүҙәрен, туғандары һәм дуҫтары менән Башҡортостанға йышыраҡ килеүҙәрен теләне.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ӘҘ ГЕНӘ ТҮЛӘ ЛӘ...



**Баланы лагерға ебәрәһең дә аҡса алаһың. Быны балалар кешбэгы ярҙамында нисек тормошҡа ашырырға мөмкин булыуы хаҡында аңлатабыҙ.**

**1-се аҙым.** Үҙегеҙҙең "Мир" картаһын https://privetmir.ru/register/ программаһында теркәйһегеҙ. **2-се аҙым.** Мирпутешествий.рф сайтында Рәсәйҙең балалар лагерҙарына юллама һайлайһығыҙ. **3-сө аҙым.** Юллама хаҡын акция сайтында онлайн "Мир" картаһы ярҙамында түләйһегеҙ. **4-се аҙым.** Түләгәндән һуң биш эш көнө эсендә бронь хаҡының 50 проценты күләмендә (ләкин бер бронь өсөн 20 мең һумдан артыҡ түгел) кешбэк алаһығыҙ. **5-се аҙым.** Балағыҙҙың шатланғанын күреп, ҡыуанаһығыҙ. Тағы ла. Уҙған йылдағы кеүек, быйыл да Башҡортостанда https://мирпутешествий.рф/ порталында юллама һатып алып, балалар кешбэгы программаһында ҡатнашҡан ата-әсәләргә республика бюджетынан 30 процент (5934,60 һум) күләмендә компенсация ҡаралған.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯҢЫ ҠАҒИҘӘЛӘР

**Башҡортостанда 1 июлдән инвалидлыҡ юллауҙың яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә индерелә.** Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт, ғаилә һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, хәҙер шәхсән барып йәки ситтән тороп экспертиза үтергә мөмкин. "Ситтән тороп экспертиза үтеү юлын һайлаған осраҡта, медицина документтары нигеҙендә ҡарар сығарыла - шәхсән килергә йәки документтар килтерергә кәрәкмәй. Барлыҡ мәғлүмәт комиссияға медицина ойошмаһынан ебәрелә. Махсус ҡорамал ярҙамында тикшереү үтеү талап ителһә, мотлаҡ килергә кәрәк. Медицина-социаль экспертизаны шәхсән барып үтеүҙе һайлаған осраҡта, регистратураның электрон сервисы аша процедура үтеү көнөн һәм ваҡытын билдәләргә мөмкин", - тип белдерҙеләр министрлыҡта. Кемдәрҙең 1 июлдә инвалидлыҡ осоро сыға, уларға ваҡытында медицина-социаль экспертизаға йүнәлтмә юлларға кәрәк.

✓ **Башҡортостанда ауыл ерендә эшләгән дәүләт һәм муниципаль ойошмаларҙың белгестәренә компенсация түләүҙәре арттырылмай, сөнки бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы йыл да индексациялана, уны иҡтисад буйынса уртаса кимәлгә еткереү процесы бара.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты ултырышында республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Ольга Кабанова ошо турала белдерҙе. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта ауылда мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт һәм сәнғәт, ветеринария, социаль өлкә, физкультура һәм спорт өлкәһендәге белгестәр, шул иҫәптән эшләп йөрөгән пенсионерҙар өҫтәмә түләү алырға хоҡуҡлы. Аҡса ике вариантта - берҙәм компенсация түләүе йәки окладҡа 25 процент күләмендә өҫтәмә итеп бирелә. 2021 йылда Башҡортостанда ауыл ерендә эшләгән 73 217 кеше 535 миллион һумдан ашыу суммаға өҫтәмә аҡса алған.

✓ **Башҡортостанда медицина хеҙмәткәрҙәренә компенсация түләүҙәре тураһындағы Хөкүмәт ҡарары (2019 йыл 7 май) ғәмәлдән сығарылды.** Ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары был документты ауыл табиптарына бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙе бөтөрөү тип ҡабул итте. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Софья Алёшина хәбәр итеүенсә, республика программаһы "Ауыл табибы" федераль программаһы критерийҙары буйынса үтмәгән, шулай уҡ 2012 йылдан ауыл ерендә эшләп йөрөгән табиптарҙы дәртләндереү маҡсатында әҙерләнгән. "Ошо ҡарарға ярашлы быйыл 27 медицина хеҙмәткәре аҡса алған, - тине ведомство вәкиле. - Башҡортостанда ауыл ерenә эшкә ҡайтҡан медиктар өсөн "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" федераль программалары эшләй. Табиптарға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең күләме - 500 мең һумдан 1,5 миллион һумға тиклем, фельдшерҙарға - 500 мең һум".

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Банан

❖ Ашҡаҙандың язва ауырыуынан көн һайын 1-әр банан ашарға.

❖ Йүтәлләгәндә бешкән бананды иләк аша үткәреп эсе һыу ҡойолған кәстрүлгә һалырға (1 кәсә һыуға 2 банан), тағы берҙе йылытырға һәм ошо ҡатышманы эсергә.

### Ҡара мәрүәр

❖ Үпкә яман шеше (рак) менән сирләгәндән ҡаты йүтәлләгәндә һәм үпкәлә шыйыҡлыҡ тупланһа, ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр ҡара мәрүәр (бузина черная) сиробын 1-әр десерт ҡалағы эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән ҡара мәрүәр емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 20 минут төнәтергә. Дауаны ашағандан һуң көнөнә 3-4 тапҡыр 50-шәр мл эсергә.

### Әстерхан сәтләүеге

❖ Түллек бизе кистаһы булғанда 15-20 сәтләүектең ҡабығына 0,5 литр араҡы ҡойоп, 10 көн төнәтергә. Быларын менән тәүлегенә 1 тапҡыр дауаланырға: 1 ҡалаҡ төнәтмәгә ярты стакан һыу ҡушырға һәм иртәнсәк ас ҡарынға эсергә. Бер айҙан тикшерелеүгә барырға. Ҡабыҡтарҙы һөҙөп алмаҫҡа.

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда 45 көн дауамында көн һайын 100-әр грамм әстерхан сәтләүеге ашарға. Бал ҡушырға мөмкин.

### Петрушка

❖ Һимеҙлек, артыҡ ауырлыҡ менән яфаланғанда көн һайын яңы петрушканың 1-әр стакан сәйен эсергә. Уны 1-2 балғалаҡ петрушкаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә. Бер нисә өлөшкә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөргә лә була.

❖ Петрушка метеоризмдан - эсәктәрҙә газдар күбәйеү сәбәпле эс күбеү һәм газ сығарыуҙан да ярҙам итә. 4 балғалаҡ киптерелгән йәки яңы ҡаҙып алынған петрушка тамырын 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, төнгөлөккә ҡалдырырға (8-10 сәғәткә). Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле эс күпкән саҡта ваҡыт-ваҡыты менән дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

*✓ "Һеҙ ил һәм республиканың иҡтисади үҫеше, төрлө башланғыстар һәм саралар тураһында һөйләйһегеҙ. Халыҡ был хаҡта мотлаҡ белергә тейеш. Был үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү өсөн дә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Бөрйән ҡул оҫталарының әйберҙәре айырыуса юғары баһаланған. Хәҙерге Бөрйән районының көньяғындағы Миндеғол, Кейекбай, Ғәҙелгәрәй, Ҡотан, Мәҡсүт һәм башҡа ауылдарҙа эшләнеше һәм биҙәлеше йәһәтенән айырылып торған үҙенсәлекле тәпәндәр яһағандар. Уларҙың ҡайһы берҙәре Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнография буйынса баҫмаларында донъя күргән. XX быуат башында уҡ С.И. Руденко Рус музейы өсөн бөрйән башҡорттарынан бер нисә көрәгә һатып ала. Шул уҡ осорҙа венгр ғалимы Месарош Дьюла аша ошо төбәккә хас көрәгәләрҙең береһе Будапешт ҡалаһындағы Этнография музейына барып эләгә. Һырланған көрәгәләр шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының Милли музейында, М.В. Нестеров исемендәге Художество музейында, Өфө ҡалаһындағы Археология һәм этнология музейында һ.б. ла бар. Бөрйән районы һәм уға күршеләш Баймаҡ менән Күгәрсен райондарында ла уларҙы йыш осратырға мөмкин булған саҡтарҙан да күп ваҡыт үтмәгән.



*Ҡымыҙ өсөн тәпән һәм ижау. БХМ фондынан. Рәссамы И.Ф. Кибальник*

Ҡымыҙ көрәгәләре эшләнгән ауылдарҙа башлыса боронғо башҡорт ырыуҙарының береһе - бөрйән кешеләре йәшәгән. Бөрйән тәпәндәре бейек булмаған: тәрәнлеге 30 сантиметрҙан да артмаған, диаметры 32-34 сантиметр тәшкил иткән. Ситтәренең уртаһы тирәһендәрәк бер аҙ ҡабарынҡы булып, дүрт тояғы һәм ике оҙонсараҡ сығынты-тотҡалары менән бер бөтөн итеп юнылғандар. Ҡапҡасының ике ҡырынан да сығынтылары булған. Ауыр ҡапҡастар һауытҡа йым ғына итеп эшләнгән. Ҡапҡастың тигеҙ ере ҙур булмаған түңәрәк рәүешендәге ҡабарынҡы ҡайма менән уратылған. Ауыҙы ябыҡ тәпән тирмәне хәтерләткән. Бындай көтөлмәгән сағыштырыу юҡтан түгел: был уның ситенә яһалған семәрҙәрҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Ғәҙәттә, тәпәндәрҙең өҫкө һәм аҫҡы яғын арҡан йәки бауҙы хәтерләткән тар ғына орнамент һыҙаттары биҙәгән.



*Бөрйән тәпәндәре ҡапҡасындағы семәр. РЭМ фондынан*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

**Йөҙ яуызлыҡты бер дөрөҫлөк еңер, тип иҫәпләгән халыҡ һәм хәҡиҡәт мең йылдан һуң да өҫкә ҡалҡырына ышанған. Бөгөн был һүҙҙәрҙең ысынға сығыуын ихлас көҫәп торған заман килде, тик аҡ менән ҡараны айырыуы ғына ҡатмарлашты. Быларҙың барыһының да тамыры ҡайҙа һәм матбуғат сараларына ышанысты нисек кире ҡайтарырға? Баш ҡаланың "Торатау" Конгресс-холында үткән "Медиайыйын" Башҡортостандың киң мәғлүмәт саралары форумында йәнә ошо һорауға яуап эҙләнде.**

# ХӘҠИҠӘТ ЯҠЛЫ БУЛАЙЫҠ!



Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән икенсе тапҡыр ойошторолған "Медиайыйын"да быйыл 600-гә яҡын кеше ҡатнашты. Сара быйыл милли киң мәғлүмәт саралары вәкилдәрен генә түгел, республиканың барлыҡ журналистарын йыйыуы менән айырылып торҙо. Эшлекле һөйләшеүҙәр Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың сығышынан башланып китте. Республика етәксеһе тәү ситтатта беренсе йыйындың "15 наказы" буйынса эш алып барылыуы һәм әлегә 9-ҙы ниндәйҙер кимәлдә хәл ителеүе, ҡалғандарының "уңға этәреп ҡуйылыуы" хаҡында хәбәр итте. Ил генә түгел, бөтә донъя тарихында шаҡтай үҙгәрештәр барған был осорҙа власть менән халыҡ араһында үҙенсәлекле бер еп-бәйләнеш сифатында сығыш яһаған киң мәғлүмәт сараларының берҙәм булырға тейешлегенә баҫым яһап, йыйынға төбәктең дәүләт ҡарамағында тормаған мөхәрририәттәре саҡырылыуының да мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Фәрит улы. Хатта уларға был ҡатмарлы мәлде үткәреп ебәрергә ярҙам итеү маҡсатында гранттар булдырыуҙы ла ойошторорға тәҡдим итте. Ғөмүмән, Хөкүмәттең һәр башланғысын халыҡҡа дөрөҫ еткереүгә булышлыҡ иткән журналистарҙың эшен юғары баһалап, маҡтау һәм рәхмәт һүҙҙәрен дә белдерҙе республика Башлығы. Ул шулай уҡ Украиналағы махсус хәрби операцияны объектив яҡтыртҡан Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хеҙмәткәрҙәре Азат Саҙрыев, Вадим Исламов, Рафиҡ Әхмәтшин, Булат Саҙрыев, "Юлдаш" радиоһынан Вадим Лаврентьев, "Башинформ" агентлығынан Азат Ғиззәтуллин һәм Олег Яровиков, "Независимая Уральская газета"нан Линар Мингазовты айырым телгә алып үтте. "Ыңғай ваҡиғаларҙы яҡтыртыу - журналист өсөн заман шарттарында бик ҡатмарлы маҡсат. Һеҙ ил һәм республиканың иҡтисади үҫеше, төрлө башланғыстар һәм саралар тураһында һөйләйһегеҙ. Халыҡ был хаҡта мотлаҡ белергә тейеш. Был үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү өсөн дә кәрәк, йәштәр илһөйәр булып үҫергә тейеш. Бөгөнгө ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сығырбыҙ һәм тиҙҙән беҙгә бик күп халыҡ-ара проекттар һәм ваҡиғалар әйләнеп ҡайтыр, тип ышанам", - тине Радий Хәбиров.

Республика етәксеһенән һуң саҡырылған ҡунаҡтар "Russia Today" телеканалының генераль директоры Алексей Николов һәм "Аргументы и факты" акционерҙар йәмғиәте генераль директорының беренсе урынбаҫары Марина Мишункина һүҙ алды. Журналист һөнәренең асылы тураһында ҡыҫҡа ғына телмәр тотоп, улар бөгөн халыҡтың ышанысын яулауҙың мөһимлегенә баҫым яһаны. "Журналистарға бөгөн социаль селтәрҙәр менән мәғлүмәтте тиҙерәк еткереүҙә ярышыуы ауыр. Шуға мөхәрриәттәргә һәм профессиональ коллективтарға мәғлүмәттәрҙе дөрөҫләүгә һәм ваҡиғаларҙы объектив яҡтыртыуға бар тырышлығын һалырға кәрәк. Һеҙҙең төп бурысығыҙ - кешеләр ышанған баҫмаларҙың һәм каналдарҙың абруйын һаҡлау. Тимәк, профессионалдар булып ҡалыу иң мөһиме. Традицион киң мәғлүмәт саралары нәҡ ошо юҫыҡта үҫешергә тейеш", - тине Алексей Львович. Уның сығышы һуңғы йылдарҙа ябылам-ябылмайым тип ҡалтырап торған район-ҡала баҫмаларының яҡты киләсәгенә өмөт ҡуҙы тоҡандырғандай булды. Ә бына Марина Мишункина халыҡтың ышанысын көсәйтеү өсөн журналистарҙың хәл-ваҡиғалар тураһында яҙғанда үҙ ҡатнашлығын белдереүе мөһим булыуын әйтте. Кешеләр эргәһендә йәшәгәндәргә нығыраҡ ышана, тип иҫәпләй ул.

Ышаныс тигәндән, бөгөн донъяла барған хәл-ваҡиғалар тураһында интернет селтәрендә таралған бихисап төрлө хәбәрҙәрҙең, видеоларҙың ҡайһыһында хаҡ хәбәр еткерелеүен аңлап айырырлыҡ та түгел ҡайсаҡ. Был турала һәм журналистарҙың илһөйәрлеге хаҡында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Азат Бадранов, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев менән Донецк Халыҡ Республикаһы Башлығының Мәғлүмәти сәйәсәт департаменты директоры Алена Алексеева ҡатнашлығындағы түңәрәк ҡорҙа етди һөйләшеү булды.

Алена Александровна әйтеүенсә, хәҡиҡәт яҡлы булған журналистарға уларҙа эшләүе еңел, сөнки ялған мәғлүмәт уйлап табырға, таратырға кәрәкмәй. Әммә йәштәр менән аңлашыу өсөн замана тенденцияларына эйәреп етә алмау эште ҡатмарлаштыра. "Беҙгә ҡаршы бөгөнгө көндә кем сыға, иғтибар итегеҙ. Был 20-30 йәшлектәр. Уларҙың өләсәй-олатайҙары беҙҙең уртаҡ тарихты иҫләй, әсәй-атайҙары белә, ә үҙгәртеп ҡороуҙан һуң тыуған балаларына патриотик тәрбиә етмәгән, сөнки уларҙы ҡурсалар йәмәғәт ойошмалары юҡҡа сыҡҡан. Пионерҙар, комсомолдар ойошмаларын бөтөрөүҙең һөҙөмтәһен күрәбеҙ. Ярай әле, беҙҙең быуын уларҙы хәтерләй һәм һаҡҡа баҫты. Азат ителгән территорияла дәүләт ҡарамағындағы киң мәғлүмәт саралары юҡ, шулай ҙа мин 18 гәзит редакцияһы менән эшләйем әле. Беҙ хөкүмәт эшмәкәрлеген яҡшы яҡтан сағылдырыуҙы ғына түгел, төрлө проблемаларҙың хәл ителеү-ителмәүен күрһәтеүгә баҫым яһайбыҙ. Был мөһимерәк, сөнки халыҡ күрә һәм үҙе һығымта яһай. Беҙҙе көн дә ут аҫтына тотоуҙары тураһында ғына ла яҙмайбыҙ, көндәлек тормошобоҙҙа барған ыңғай ваҡиғаларға ла иғтибар итергә тырышабыҙ. Хәҙер көн һайын ярҙам килеп тора, Башҡортостан беҙгә беренселәрҙән булып ярҙам күрһәтте, рәхмәт", - тине Алена Алексеева.

Уның һөйләгәндәрен тыңлаған һәр кемдең күңелендә журналист һөнәренең асылы һәм мөһимлеге тураһындағы күҙаллауҙары яңырғандыр, моғайын. Сөнки һуңғы осорҙа был һөнәр кешеләренең ҡайһыһы ваҡытлыса килем, билдәлелек артынан ҡыуып, үҙ тәғәйенләнеше хаҡында онотоп та киткәндәй булғайны, буғай. Әле махсус хәрби операция барған урындарҙа эшләгән хеҙмәттәштәребеҙ беренселәрҙән булып баҫма матбуғаттың ҡиммәтен һәм дөрөҫлөктөң хаҡын аңлаған. Мариуполь ҡалаһында һаман да ут юҡ икән һәм мәғлүмәтте ваҡытында еткереүе ауырлашҡан шундай урындарға махсус рәүештә гәзиттәрҙе күберәк дана менән нәшер итеп тараталар. "Азат ителгән территорияларҙың гәзиттәрен һаҡлап ҡалырға тырышабыҙ, аҡлы-ҡаралы булғандары урынына төҫлө итеп нәшер итәбеҙ", ти Алена ханым. Ултырышта ҡатнашыусыларҙың күбеһен йәш быуынды тәрбиәләү мәсьәләһе борсоуға һалғайны, фекер алышыуҙар һуңында Алена Александровна әле өс йыл нәшер ителмәй торған "Умка" балалар журналын тергеҙергә теләген белдерҙе.

Форумда ҡатнашыусылар йәмғеһе һигеҙ төрлө темаға арналған майҙансыҡта белгестәрҙең фекерҙәрен тыңланы, борсоған һорауҙарҙы күтәрҙе. Беҙҙең өсөн мөһим күренгән милли матбуғатҡа арналған секцияла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, тарихсы Юлдаш Йосоповтың үткән быуаттың 90-сы йылдарында барған ваҡиғаларҙан фәһем алып, бөгөн ошо тәжрибәне ҡулланырға һәм ҡотҡоға бирелмәҫкә, дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итеп эшләргә кәрәклеге тураһындағы фекере әһәмиәтле булды. Быға бәйле ул милли киң мәғлүмәт сараларын үҫтереү концепцияһы һәм стратегияһын уйлап, бойомға ашырыу зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был майҙансыҡта һөйләшеүҙән шул мәғлүм булды: милли матбуғат вәкилдәре, элеккесә, көс түгеп, бар тырышлығын һалып эшләүен дауам итә һәм был йәһәттән уларға Хөкүмәт тә өмөт бағлап тора. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың сентябрь-октябрь айҙарында милли матбуғат вәкилдәре менән тағы берҙе айырым осрашырға теләк белдереүе иһә беҙҙең матбуғат баҫмаларының һаман хәл ителмәгән проблемаларын да иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫтарына ишара яһағандай булды...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Форумдың ниндәй фекер алышыу майҙансығына инмә, барыһында ла донъяла барған һуңғы ваҡиғалар, илһөйәрлек, бөгөнгө геройҙар, ышаныс һәм хәҡиҡәт тураһында һүҙ барҙы. Беҙҙең республиканың дәүләт ҡарамағындағы күпселек киң мәғлүмәт саралары өсөн былар барыһы ла асыш түгел, ә оҙаҡ йылдар дөрөҫ йүнәлештә эш алып барыуҙарына тағы бер дәлил генә булып яңғыраны. Сөнки халыҡтың ышанысын аҡлар өсөн журналистарға ни бары ваҡытында кешелек сифаттарын юғалтмаҫҡа һәм һүҙенә тоғро булып ҡалырға ғына кәрәк бит.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ОЛО БАШҠОРТОСТАНҒА - 100 ЙЫЛ

**Ошо көндәрҙә, атап әйткәндә, әлеге йылдың 14 июнендә, республикабыҙҙың административ-географик сиктәре киңәйтелеп, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килеүенә теүәл бер быуат тула. Тарихи масштаб өсөн был әллә ни күп тә түгел һымаҡ: ошо ваҡыт арауығында ни барыһы 4 быуын алышынған. Әммә халҡыбыҙҙың тарихи тамырҙары үтә боронғо замандарға барып тоташа. Бынан теүәл 1100 йыл элегерәк Тарихи Башҡортостандың көньяҡ тарафтарынан Булғар ханлығына табан ғәрәп хәлифе әл Муҡтадир илселеге үтеп китә. Илселектең уҡымышлы сәркәтибе ибн Фаҙлан башҡорттар тураһында үтә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ҡалдыра. Шул замандарҙа уҡ ата-бабаларыбыҙ үҙаллы, бер хакимға ла баш бирмәҫ халыҡ булараҡ танылған була.**

**Шуныһы ҡыҙыҡ, боронғо башҡорт иле хаҡындағы мәғлүмәт кешенең боронғо биогенетик хәтерендә лә һаҡлана икән. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында, махсус алым менән психологик тәжрибәләр үткәргәндә, бер башҡорт студенты үҙенең мейе төпкөлөндә (аҫҡы аңында) һаҡланған күренеш хаҡында һөйләгәйне. Баҡтиһаң, ул Искәндәр исемле бер яугир булып, 1236 йылда монгол ғәскәре составында Киев ҡалаһын алыуҙа ҡатнашҡан икән. Шуныһы ла ғәжәп, ул үҙенең Башҡорт иле кешеһе булыуы хаҡында ла белдерҙе. Шуға күрә Оло Башҡортостаныбыҙҙы тарихи Башҡорт иленең варисы тип нарыҡлау һис тә яҙыҡ булмаҫ. Ә әлеге яҙмабыҙҙа һүҙ бынан 100 элек булып үткән тарихи ваҡиғалар хаҡында булыр.**

Мәскәүҙә 1917 йылдың ноябрендә большевиктар хөкүмәте тарафынан "Рәсәй халыҡтары хоҡуҡтары декларацияһы" тигән документ ҡабул ителеүгә күп тә үтмәй, башҡорт федералистары Башҡортостандың милли-территориаль автономияһына нигеҙ һала: 15 ноябрҙә (яңы стиль менән - 28 ноябрҙә) Башҡорт мәркәз шураһының икенсе һанлы Фарманы аша Башкурдистан автономияһы иғлан ителә. Ошо тарихи документҡа шура рәйесе Шәриф Манатов, уның урынбаҫары Әхмәтзәки Вәлидов, шура сәркәтибе Шәйехзада Бабич һәм алты бүлек мөдире ҡул ҡуя. 1917 йылдың 22 ноябрендә большевиктарҙың "Правда" гәзитендә ошондай мәғлүмәт баҫылып сыға: "Башҡорт өлкә советы Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналарының башҡорт территорияһын Рәсәй республикаһының автоном өлөшө, тип иғлан итте һәм Ырымбур губернаһы сиктәрендә автономияны бойомға ашыра башланы". Әйтергә кәрәк, Үҙәк Совет власы ул мәлдә башҡорт зыялылары тыуҙырған автономияға ҡаршы килмәй.

Февраль революцияһынан һуң Рәсәйҙә федерализм принциптарына ярашлы үҙгәртеп ҡороу юлында арымай-талмай эшмәкәрлек алып барған йәш сәйәсмән Әхмәтзәки Вәлидов тап шул саҡта 3 карта эшләй: беренсеһе - Оло Башҡортостан картаһы; икенсеһе - Кесе Башҡортостан (Ырымбур губернаһы сиктәрендә); өсөнсөһө - Башҡортостан, Ҡаҙағстан һәм Төркөстан республикаларынан хасил булаcаҡ союздаш мосолман дәүләте картаһы.

Әлбиттә, Әхмәтзәки Вәлидов һәм уның арҡадаштары ерле автономияны башҡорт халҡының милли үҙбилдәләнешен ғәмәлгә ашырыу сараһы итеп ҡарай. Ул автоном республикала башҡорт халҡының ошо территорияла йәшәүсе башҡа милләт кешеләре менән нисбәтендә һан яғынан күберәк булыуын мөһим фактор тип иҫәпләй. Әммә Вәлидов Рәсәйҙә революцион хаос хөкөм һөргән, граждандар һуғышы ҡабына башлаған киҫкен сәйәси ситуацияла башҡорт халҡының реаль автономияһын бары тик Кесе Башҡортостан сиктәрендә генә бойомға ашырып булаcағын да яҡшы аңлай.




Тәүге башҡорт хөкүмәте, сәйәсәттә нейтраль позиция тотоп, граждандар конфликтынан ситтә ҡалырға иҫәп тота. Ырымбур большевиктары етәксеһе Цвиллинг Әхмәтзәки Вәлидов һәм Башҡорт хөкүмәте ағзалары менән осрашып, улар совет власына ҡаршылыҡ күрһәтмәһә, башҡорттарҙың эске эштәренә ҡыҫылмаясағы хаҡында белдерә.

Әммә 1918 йылдың 16 февралендә Мосолман хәрби-революцион комитеты (татар-башҡорт большевиктары Ғ. Шәмиғолов, Б. Нуриманов, К. Хәкимов һ.б.) ҡотҡоһо һөҙөмтәһендә Башҡорт хөкүмәте ағзалары (8 кеше) ҡулға алынып, Ырымбур төрмәһенә ябыла. Ә.-З. Вәлиди Туған "Хәтирәләр" китабында хөкүмәт ағзаларын ҡулға алыуҙы һалдаттарҙың татар милләтенән булыуын иҫкә ала. Баймаҡта башҡорт офицерҙары Ғимран Мағазов, Ғабдулла Иҙелбаев һәм 17 һалдат бер гәйепһеҙгә ҡыҙылдар тарафынан атып үлтерелә. Большевиктар тәү сиратта яңы ойошторолоусы башҡорт полкын юҡ итергә ниәт ҡора. Цвиллинг, төрмәгә килеп, Әхмәтзәки Вәлидовтан башҡорт ғәскәрен таратыу хаҡында бойороҡ биреүҙе талап итә. Вәлидов ризалашмай. 1918 йылдың апрель айы башында Әмир Ҡарамышевтың һалдаттары, атаман Дутов казактары менән Ырымбур ҡалаһына төнгө налет эшләп, хөкүмәт ағзаларын төрмәнән азат итә. Шулай итеп, башҡорттар сараһыҙҙан адмирал Колчак яғына сығып, ҡыҙылдарға ҡаршы көрәшкә күтәрелергә мәжбүр була.

Адмирал Колчак 1918 йылдың ноябрендә үҙен Рәсәйҙең Юғары хакимы итеп иғлан итә, өлкә хөкүмәттәрен танымау, милли-хәрби берекмәләрҙе, айырым башҡорт ғәскәрен дә башҡа рус полктары составына таратыу хаҡында бойороҡ бирә. Әлбиттә, монархист Колчак башҡорт халҡының милли автономияға хоҡуғын да инҡар итә. Ошо ҡатмарлы сәйәси шарттарҙа, 1919 йылдың февраль-март айҙарында, Әхмәтзәки Вәлидов һәм уның арҡадаштары башҡорт ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыу шарттары тураһында большевиктар власы менән килешеүгә ынтыла. Һөҙөмтәлә Үҙәк Совет хөкүмәте тарихта киң билдәле булған хоҡуҡи документ ҡабул итә, ул "Соглашение Центральной Советской власти с Башкирским Правительством о Советской Автономной Башкирии", тип атала.

1917 йыл аҙаҡтарында иғлан ителгән Беренсе башҡорт автономияһы русса "Башкурдистан" тип аталып йөрөтөлһә, 1919 йылдың мартында Совет власы менән килешеү нигеҙендә төҙөлгәне рәсми рәүештә "Автономная Башкирская Советская Республика" исемен ала. Уның составына Ырымбур губернаһының "Кесе Башҡортостан" тип атала башлаған территорияһы инә. Кесе Башҡортостандың административ бүленеше кантондарҙан хасил була. Үрҙә аталған Килешеүҙә барлығы 13 башҡорт кантоны күрһәтелә: Арғаяш кантоны (үҙәге Арғаяш ауылында, идара рәйесе - Нуриәғзәм Таһиров), Бөрйән-Түнгәүер кантоны (Таналыҡ ауылы, Мөхәмәтйән Булатов), Дыуан кантоны (Арҡауыл, Шакир Төхвәтуллин), Ете ырыу кантоны (Имангол, Фәттәх Сәлтәшев), Көҙәй кантоны (Таутөмән, Мәхмүт Ҡотоев), Ҡошсо кантоны (Оло Аҡа, Мөхәмәтхәй Ғөзәйеров), Ҡыпсаҡ кантоны (Мораҡ, йәғни Ҡыҙыл Мәсет, Миһран Сыртланов), Табын кантоны (Еҙем-Ҡаран, Шаһибәк Үҙбәков), Тамъян-Ҡатай кантоны (Верхнеурал ҡалаһы, Талха Рәсүлев), Тук-Соран кантоны (Иҫке Ғүмәр, Абдрахман Ильясов), Үсәргән кантоны (Ейәнсура, Мөхәмәтғалим Ҡыуатов), Юрматы кантоны (Ергән, Әүхәҙи Ишмырҙин), Ялан кантоны (Тәңрекүл, Ғәлимйән Тағанов).

Әлбиттә, башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре Рәсәйҙең төрлө губерналарында йәшәүсе башҡорттарҙы ҡайтанан берләштерергә теләй, хатта ки уларҙы автономия территорияһына күсереп алыу хаҡында ла уйлана. Әммә бөтөн Рәсәй территорияһында барған ҡанлы граждандар һуғышы шарттарында бындай пландарҙы бер нисек тә ғәмәлгә ашырып булмағанлығын да улар яҡшы аңлай. Башҡорт халҡының ирекле үҙбилдәләнеше Кесе Башҡортостан ерлегендә тормошҡа ашырыла.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Батырҙарға ла ял кәрәк

Март-апрель айҙарында корпус яугирҙарына оборона рубежын нығытыу, дошман тылына разведка яһау кеүек боевой бурыстар йөкмәтелә. Һәр бер полкта снайперҙар төркөмдәре ойошторола. 1943 йылдың 14 апрелендә корпус Юғары Баш Командование Ставкаһы резервына сығарыла. Корпус 10 майҙа марш менән Воронеж өлкәһенең Павлов районына килеп урынлаша. Бында яугирҙар 1943 йылдың 12 июленә тиклем ялда була.

Сталинград һуғышында ҡатнашып, шулай уҡ ҙур юғалтыуҙарға дусар булған 4-се атлы корпустың иҫән ҡалған командирҙары һәм яугирҙары ла шул уҡ Павловск ҡалаһына килеп етә. Был корпус тарҡатыла, уның составындағылар 7-се гв. корпусына ҡушыла. Ошо рәүешле 7-се корпус, шул иҫәптән беҙҙең 16-сы гв. дивизияһы ла тулыландырыла. Корпус командиры вазифаһына генерал-майор М. Ф. Малеев тәғәйенләнә. Корпус штабы начальнигы итеп гв. генерал-майоры И. И. Щитов-Изотов, корпус командиры урынбаҫарҙары вазифаһына генерал-майор А. В. Ставенков, гв. полковнигы В. А. Степаненко ҡуйыла.

Гв. генерал-майоры М.М. Шаймуратов һәләк булғандан һуң 16-сы гв. атлы дивизияһын гв. полковнигы Григорий Андреевич Белов етәкләй. Дивизияның команда һәм рядовой составы ла ҙур үҙгәрештәр кисерә. Һәләк булған, яраланған офицерҙарға алмашҡа запас полктарҙан, башҡа хәрби частарҙан командирҙар килә. Башҡорт дивизияһы өр-яңынан ҡорола. Мәҫәлән, 60-сы гв. полкына элекке 4-се кавкорпустан 400-гә яҡын рядовой һәм сержант алына. Дивизияға яңы алынған яугирҙар сығыштары менән СССР-ҙың төрлө тарафтарынан - Украинанан, Ҡаҙағстандан, Урта Азия республикаларынан, Краснодар һәм Ставрополь крайҙарынан, Сталинград, Ростов, Һарытау, Воронеж өлкәләренән була. Әммә ут-һыуҙарҙы кискән 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ветерандары ошо данлы хәрби частың нигеҙен тәшкил итә. Элекке 101-се атлы артиллерия дивизионы базаһында 148-се гв. артиллерия-миномет полкы ойоштоларола, 1943 йылдың май айында уның командиры итеп гв. подполковнигы Сәйфулла Хәбиров ҡуйыла.

58-се гв. атлы полкы командиры вазифаһына яралanғандан һуң госпиталдә дауаланып сыҡҡан гв. подполковнигы Т.Т. Кусимов ҡуйыла. Ошо полктың эскадрон командирҙары вазифаһына лейтенант П. Г. Язенко, өлкән лейтенант М. М. Гранитов (атлы ғәскәрҙәрҙең Генераль штабынан), гв. өлкән лейтенанты А. М. Рудой, уның урынбаҫары, лейтенант Байрам Ҡорбанов (милләте буйынса төркмән), танкыға ҡаршы батарея командиры - лейтенант А. Г. Федосеев (Харьков артиллерия училищеһынан) тәғәйенләнә.

60-сы гв. атлы полкының яңы командиры - подполковник Иван Федорович Горлатов, уның урынбаҫары - капитан Р. М. Газиев (милләте буйынса даргин), политбүлек буйынса урынбаҫары - гв. майоры Ш. Н. Закиров була. Эскадрон командирҙары - өлкән лейтенант М. Д. Батенюк (полк разведдивизионының элекке командиры), өлкән лейтенант Мөлки Байрамов (төркмән); 2-се эскадрондың станковый пулеметтар взводы командиры, гв. сержанты Әмирйән Хәйҙәров (дивизияла 1942 йылдан бирле ошо полктың пулемет расчеты командиры), сабельниктар взводы командиры - лейтенант Василий Сокур (украин); 3-сө эскадрон командиры - өлкән лейтенант Хөсәйен Мирсаяпов; 4-се эскадрон командиры - өлкән лейтенант Тхамаков Абдулла (милләте буйынса ҡабарҙы). Полктың партия ойошмаһы секретары вазифаһын өлкән лейтенант Хәсән Биксурин үтәй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Ата-әсәһен, халҡын, туғандарын яратмаған кеше тыуған иленең патриоты була аламы? Юҡ, әлбиттә! Беҙҙең әңгәмәсебеҙ атаһының, әсәһенең тыуған ауылдарында олатайҙарының хөрмәтенә мәсет һалдырған. Өфө ҡала советы депутаты, Башҡортостан Республикаһының Диңгеҙ Йыйылышы (Морское Собрание) ойошмаһы рәйесе Юлай Азамат улы МОРАТОВ үҙенең тормош биографияһын хәрби-диңгеҙсе булараҡ башлаған. Уның менән патриотик тәрбиә хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ИЗГЕ НИӘТТӘР МЕНӘН БЕРЛӘШӘЙЕК,

## һәр осраҡта ла маҡсат ысулды аҡлай

**Юлай Азамат улы, һеҙ урта мәктәпте тамамлағас, хәрби диңгеҙсе юлын һайлағанһығыҙ, ә беҙҙең Башҡортостан оло һыу юлдарынан, диңгеҙҙәрҙән, океандарҙан алыҫ урынлашҡан. Осраҡлы булдымы ошо хеҙмәтте һайлауығыҙ?**

- Осраҡлылыҡ факторы 200 процентты тәшкил итә, тип әйтер инем. Өфөлә тыуып үҫтем, алты айлыҡ сағымдан Учалы районының Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылында йәшәнем. Шунда һигеҙ йыллыҡ мәктәптә уҡыным, урта белемде Уральск ауылы мәктәбендә тамамланым. Бөтә фәндәрҙән дә "бишле"гә өлгәштем, шулай уҡ көрәш, атыу, саңғыла йүгереү буйынса спорт төрҙәрендә яҡшы күрһәткестәргә өлгәштем. Мәктәптең военругы хәрби училищеға барырға тәҡдим итте. Ә әсәйем мине Өфөләге медицина институтына барырға әҙерләгәйне. Бынан тыш, мин бала саҡта һүрәт төшөрөү менән мауыға инем. Һәҙөмтәлә барыбер ҙә военруктың йоғонтоһо көслө булғандыр, Санкт-Петербургтағы хәрби диңгеҙ-медицина академияһына барырға ҡарар иттем. Бында әсәйемдең мине хирург булырға өндәүе лә эҙһеҙ үтмәгәндер.

Өфөлә комиссия үткәндә минә ул уҡыу йортона инеүе үтә ауыр икәнен иҫкәрттеләр. Бәхтиһәң, унда медицина институтының икенсе курсының һуң ғына алалар икән. Шул саҡ бергә уҡыған егеттәр мине Калининградтағы Юғары хәрби-диңгеҙ училищеһына барырға ҡоҙаланы. Улар менән киттем дә барҙым һәм һәммәбеҙҙең араһынан бер үҙем уҡырға инә алдым. Унда бер аҙ уҡығас, С.О. Макаров исемендәге Тымыҡ океан Юғары хәрби-диңгеҙ училищеһының мина-торпеда факультетына күсеп, ул уҡыу йортон 1988 йылда тамамланым. Училищенан һуң төрлө урындарҙа, Финляндия, Норвегия дәүләттәренең сигендә хәрби бурысымды үтәп, иң һуңынан Баренц диңгеҙендә хәрби хеҙмәтемде тамамланым.

**Был хеҙмәт биографияғыҙҙың хәрби өлөшө, ә граждандағы артабанғы тормош юлығыҙ нисек башланды?**

- Мин армияла СССР тарҡалғансы 1992 йылға тиклем хеҙмәт иттем. Миндә перспективалы офицерҙы күрҙеләр, ебәргеләре килмәне, шулай ҙа ҙур ҡыйынлыҡ менән булһа ла, отставкаға киттем. Байтаҡ ваҡыт гражданкала кәрәкле һөнәрҙәр өсөн уҡырға, белем тупларға тура килде. Өфөлә менеджмент буйынса халыҡара академияға уҡырға барҙым. Унда запастағы офицерҙарҙы башҡа йүнәлештәге квалификация буйынса әҙерләйҙәр ине. Унда үҙендең эшендә асмайынса, диплом бирмәйҙәр, шуға күрә үҙемдең предприятиены теркәнем. Ул әле булһын уңышлы эшләп килә. Параллель рәүештә Юридик институтта юрисҡа уҡыным. Артабан Башҡортостан дәүләт идаралығы академияһын тамамланым.

**Һеҙ совет осоронда тәрбиәләнгән, ваҡытында октябрят, пионер, комсомол ойошмалары ағзаһы булараҡ, ул замандың тәрбиә алымдарына ниндәй баһа бирәһегеҙ? Нимә генә тиһәк тә, совет власы йәш быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүлде.**

- Мин социализмды ла, үҫешкән социализмды ла, үҙгәртеп ҡороуҙы ла, СССР-ҙың тарҡалыуын да, кешеләрҙең йылдар буйына хеҙмәт хаҡы алмаған 90-сы йылдарҙы ла, яңыртылған Рәсәйҙең аяҡҡа баҫыуын да күрҙем. Бер ваҡыт хатта беҙгә Италиянан һатып алынған "һалҡын кейемде" эш хаҡы итеп бирҙеләр. Һуңынан асыҡланыуынса, ул кейемдәрҙе мәйеттәргә кейҙерер өсөн махсус теккәндәр икән. Аяҡ кейемдәре ике аҙнала, өс кейемдәре бер айҙа тирелеп төштө.

СССР тарҡалғандан алып идеология бер төрлө генә булды: күберәк табыш алыу, байлыҡ туплау. Совет осоронда инә хеҙмәт кешеһе дөйөм иғтибар үҙәгендә булды. Кадрҙар барыһын да хәл итте. Ул саҡта иң ябай хеҙмәткәрҙең проблемаһын урындағы партойошма кимәлендә хәл итеүе мөмкин ине. Үҫмер кеше хеҙмәткә һәм тыуған илен һаҡларға әҙер булып үҫеп етте. Былар барыһы ла дәүләт кимәлендә тормошҡа ашырылды. Советтар Союзы тарҡалғандан һуң тәрбиә эше менән ижтимағи ойошмалар, теге заманда тәрбиәләнгән оло быуын вәкилдәре генә шөғөлләнде, йәғни дәүләт кимәлендә был эш бөтөнләй алып барылманы.

**Һеҙ Башҡортостан Республикаһының Диңгеҙ Йыйылышы ойошмаһы рәйесе булып тораһығыҙ. Йәмәғәт эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә башлауығыҙ осраҡлы булмағандыр инде?**

- Запастағы хәрбиҙәр, ғөмүмән, патриотик рухлы граждандар илебеҙҙе, уның граждандарын һаҡлау һәм яҡлау маҡсатында йәмәғәт ойошмаларына берегә башланы. Беҙҙең Диңгеҙ Йыйылышы ла элекке моряктарҙы ғына түгел, шулай уҡ барлыҡ хәрби көстәр ветерандарын, ябай граждандарҙы ла үҙенең сафына йыйҙы. Беҙҙең ойошмала Башҡортостандан сыҡҡан 12 Рәсәй Геройы, шулай уҡ генералдар ҙа, адмиралдар ҙа почетлы ағза булып тора. Дөйөм алғанда йәмғеһе хәрби диңгеҙ флотында 34 мең яҡташыбыҙ хеҙмәт итеүе билдәле. Уларҙың араһында 36 адмирал иҫәпләнә.

Ойошма барлыҡҡа килгәндә уның төп маҡсаты Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының мәнфәғәтен социаль планда яҡлау булды. Ни өсөн тигәндә, 90-сы йылдар аҙағында, яңы быуат башында хәрби ветерандарҙың пенсияһы бик аҙ ине. Был маҡсатта һәр ҡайһыбыҙ хәленән килгәнсә уларға аҡсалата ярҙам күрһәттек, спонсорҙар таптыҡ, ай һайын уларҙың йорттарына азыҡ-түлек кәрзиндәре алып барып торҙоҡ. Артабан Владимир Путин Президент булғас, хәрби ветерандарҙың пенсияһы күтәрелгәс, хәрби-патриотик йүнәлештәге эшмәкәрлегебеҙ әүҙемләште. Беҙҙең филиалдар яҡшы эшләй, актив эшләүселәр 500-ҙән ашыу кеше.

**Баймаҡ районының бер хужалыҡ етәксеһенән интервью алып, Өфөгә юлланыр алдынан: "Машинаңа үҙебеҙҙең район заправкаһында бензин ҡой, тиндәре булһа ла үҙебеҙҙә ҡалһын", - тигәйне. Тыуған илде яратыу тураһында трибунанан юғары пафослы һүҙ һөйләүгә ҡарағанда, ошо етәксенең һүҙҙәрендә мин патриотизмды күберәк күрәм. Өфө ҡала советы депутаты, унда патриотизм менән шөғөлләнгән бүлекте етәкләгән кеше булараҡ, хәҙерге йәш быуында был тойғоно тәрбиәләү нисек булырға тейеш, тип иҫәпләйһегеҙ?**

- 9 майҙа илебеҙ ҡалалары, шулай уҡ Өфөбеҙҙә "Үлемһеҙ полк"тар маршты үтте. Уларҙың күпселеген үҫмерҙәр һәм һалдат йәшендәге йәштәр тәшкил итте. Әлеге мәлдә тап шул йәштәрҙең быуындаштары Украинала махсус операцияға барҙы. Йәғни уларҙың быуыны тормоштоң ошондай ысынбарлығы менән йөҙмә-йөҙ осрашты. Көнбайыш Европа илдәре, АҠШ сәйәсмәндәре беҙҙең хаҡта нимә генә һөйләмәһендәр, "Үлемһеҙ полк" акцияһы уларҙы тулыһынса инҡар итте.

Үҫеп килгән быуында патриотик рух тәрбиәләү - ул мәктәптәрҙә үткән батырлыҡ, патриотизм дәрестәре генә түгел, ул ҡәҙимге тормошта, ғаиләлә башланырға тейеш. Әйтәйек, иртәнсәк уянып, улыңды, ҡыҙыңды ҡосаҡлап, уларға: "Мин һеҙҙе яратам, беҙ бер ғаилә, баш ҡалабыҙ Өфө, республикабыҙ Башҡортостан, ватаныбыҙ Рәсәй", - тип әйтеүҙән башлана патриотик тәрбиә. Икенсенән, мин магазинға барһам, башҡорт балы, үҙебеҙҙә үҫкән икмәкте, һөттө, башҡа ризыкты һатып алам. Һиндтәр Англияның колонияһы булыуҙан нисек ҡотолғандар: магазиндарҙа уларҙың тауарҙарын һатып алыуҙан






***✓ Мин йәш үҫмерҙәр менән бик йыш аралашам, дәрестәр, әңгәмәләр үткәрәм. Беренсенән, улар хәҙерге технологияларҙы бик еңел үҙләштерә, икенсенән, улар 90-сы йылдарҙағы кеүек тәмәке тартмай, спиртлы эсемлектәр ҡулланмай.***



баш тартҡандар һәм инглиздәр был илдән үҙҙәре киткән. Беҙҙә лә санкциялар башланғас, көндән-көн сит ил тауарҙары кәмей бара. Кока-кола, башҡа зарарлы эсемлектәр юҡҡа сыға, бик яҡшы! Сит ил продукцияһынан ҡотолоп, беҙ үҙебеҙҙең тауарҙы етештереп, илебеҙҙең иҡтисадын күтәрә аласаҡбыҙ.

**Мәктәптәрҙә 1-се кластан тарих дәрестәре уҡытыуҙы тәҡдим иттеләр, быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Тарихын белмәгән халыҡты бер быуын эсендә икенсе халыҡ менән алмаштырып була. Мәктәптәрҙә тарих дәресен уҡытыуҙы индереү генә түгел, ҡасандыр булып онотолған башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәрен дә тергеҙергә кәрәк. Мәктәп йәшендә хәрби кейем кейгән, ҡулында хәрби ҡоралдарҙың макетын тотҡан егеттәр һәм ҡыҙҙар бер ҡасан да үҙ иленә ҡаршы бармаясаҡ. Был йәһәттән беҙҙең йәштәр һөҡләнгес. Мин йәш үҫмерҙәр менән бик йыш аралашам, дәрестәр, әңгәмәләр үткәрәм һәм быға инанам. Беренсенән, улар хәҙерге технологияларҙы бик еңел үҙләштерә, икенсенән, улар 90-сы йылдарҙағы кеүек тәмәке тартмай, спиртлы эсемлектәр ҡулланмай. Әлбиттә, был йоғонтоға бирелгәндәр ҙә бар, әммә улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ, өсөнсөнән, уларға нимәләр хаҡында аңлата башлаһаң, ыңғайы бер аңлап ҡабул итәләр.

**Май байрамдары алдынан Өфөнөң Конгресс-холл бинаһында "Атайсал" проекты сиктәрендә "Яҡташлыҡ көсө" форумы булып уҙҙы. Бик ваҡытлы башланғыс. Ни өсөн тигәндә, гражданлыҡ йәмғиәтен төҙөү актуаль булған хәҙерге заманда милләткә, дингә, фирҡәгә ҡарамаған, яҡташлыҡ принцибын алға һөргән граждандар йәмғиәтен төҙөү өсөн ошонан да ҡулайлыраҡ моделдең булыуы мөмкин түгел. "Патриот" һүҙе лә латинсанан "яҡташ" тигәнде аңлата. Был яңылыҡ хаҡында һеҙҙең ниндәй фекерҙәрегеҙ булыр?**

- Әммә яҡташлыҡ яңы ғына тыуған күренеш түгел. СССР тарҡалып, сик буйҙары асылғас, яҡташтарҙы ситтә күреүҙе ҙур байрам һымаҡ ҡабул иттек. Әйтәйек, һин, Баймаҡтан Өфөгә килһәң, һәр яҡташыңды яҡын туғаның кеүек күрһәң, Костромала Башҡортостандан килгән кешене күрһәң, яҡын туғаның һымаҡ ҡосаҡлашаһың, сит илгә сыҡһаң, Рәсәйҙән килгән һәр кеше яҡын туғаныңдай. Гражданлыҡ йәмғиәтен төҙөүҙе төпкөлдән башлау - иң дөрөҫө.

**Һеҙ тыуған ягығыҙҙа ике ауылда мәсет төҙөп, яҡташтарығыҙҙы ҡыуандырғанһығыҙ...**

- Эйе, Зәйнәкәй, Сораман ауылдарында 2010, 2012 йылдарҙа мәсет төҙөү эштәрен ойошторҙом. Ауылдарҙың береһендә әсәйем, икенсеһендә атайым тыуған. Зәйнәкәй (Бәләкәй Ҡаҙаҡкөл) ауылындағы мәсетте Хәкимйән олатайым хөрмәтенә төҙөттөм, ул Екатерина Икенсе дәүерендә ауылда указлы мулла булып торған. Ә атайым яғынан олатайым 15-се класлы дворян, кантон башлығы булған. Был мәсеттәргә намаҙға йөрөүсе яҡташтарым да шул уҡ граждандар йәмғиәтенең ячейкаһын тәшкил итә. Быйын менән шуны әйтергә теләйем: кешеләрҙе бер-берененә изге ниәттәр менән яҡынайырға булышлыҡ иткән һәр бер ғәмәл иғтибарға лайыҡ. Кемдәрҙер хәрби-патриотик эшмәкәрлек маҡсатында, кемдәрҙер айныҡ тормош алып барыу маҡсатында берләшә, кемдәрҙер ғәриптәргә ярҙам итеү маҡсатында йәмғиәт төҙөй, ҡыҫҡаһы, һәр осраҡта ла маҡсат асылды аҡлай. Кешеләр ниндәйҙер маҡсатта берләшһә, дөйөм идеология формалаша.

**Башҡорттарҙа шәжәрәнде яттан белеү, туғандарыңды һанлау принцибы ла патриотлыҡ нигеҙҙәренә таяна. Сөнки патриотизм һүҙенең тамырында "атай" төшөнсәһе ята.**

- Башҡорттар был йәһәттән бәхетле халыҡ. Минең дә атайым яҡлап ун алтынсы, әсәйем яҡлап ун бишенсе быуаттан башлап шәжәрәм төҙөлгән. Яңыраҡ 28 йәшлек ҡыҙым шылтыратып, шәжәрәбеҙ менән ҡыҙыҡһыныуын белдерҙе. Бик ҡыуандым, сөнки унда башҡа туғандарыбыҙ менән аралашыу ихтыяжы барлыҡҡа килгән.

**Һеҙгә, диңгеҙгә, һыуға туранан-тура мөнәсәбәте булған кешегә, шундай һорау: йылдан-йыл йылғалар, шишмәләр, диңгеҙҙәр һыуы кәмей бара, киләсәгебеҙ был йәһәттән күңелһеҙ түгелме?**

- Был бер циклды тәшкил иткән күренеш: һәр 12 йыл һайын һыуҙар китә һәм кире әйләнеп килә. Бына быйыл ямғырҙар норманан артыҡ яуа, ауылдарҙа ла был йәһәттән зарланырлыҡ түгел. Ғөмүмән, хәүефле хәл барлыҡҡа килеүгә кеше үҙе булышлыҡ итмәһен ине. Мәҫәлән, Өфө янындағы йылғалар ярында бихисап соҡорҙар барлыҡҡа килгән. Әгәр ҙә ҡырсынташ алыу маҡсатында был эш шулай дауам итһә, йылғаларҙың һыуы кәмеүе лә аңлашыла...

**"Әгәр ҙә тупраҡты һыу менән бутаһаң - балсыҡҡа, ҡан менән бутаһаң - тыуған илгә әүерелә" тигән бер аҡыл эйәһе. Быға ниндәйҙер комментарий бирә алаһығыҙмы?**

- Донъяны һуңғы тапҡыр бүлеү 1945 йылда булды. Шул саҡта фашизмдан азат ителгән барлыҡ илдәр һәм дәүләттәрҙә беҙҙең һалдаттарҙың ҡаны түгелгән икән, тимәк, ул ерҙәр беҙҙең тыуған ил һанала. Шул уҡ ваҡытта илебеҙҙең сик буйҙарында НАТО-ның хәрби көстәре тороуына бер ваҡытта ла риза булмаясаҡбыҙ.

**Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Юлай Азамат улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ИШАРА

**Рәсми рәүештә ҡабул ителмәһә лә, "Өфө кешеһе" тигән һүҙбәйләнеш, мәғәнә бар, йәшәй. Уны беҙ яҡшы тоябыҙ, аңлайбыҙ. Бигерәк тә баш ҡаланан ситтә, алыҫ тарафтарҙа йөрөгәндә Өфөнөң, уға мөнәсәбәтле булған кешенең күңелгә яҡынлығын ныҡ тояһың. Икенсе төрлө әйткәндә, Өфөгә ҡарата булған мөнәсәбәт йылылығы һинең дә күңелеңә сайпылһа, шундай ҡаланың гражданы булыуға ғорурлыҡ тойғоһо кисерәһең. Тағы ла шуныһы: Өфө кешеһе ниндәй генә милләт вәкиле булмаһын, барыһы ла башҡорт булып ҡабул ителә. Был хаҡта Рәсәйҙең киң билдәле ғалимы Олег Чернә баш ҡалабыҙға бер килгәнендә әйтеп үткәйне. Ул: "Башҡортостанда, Өфөлә йәшәүсе һәр кеше башҡортса һулыш ала һәм фекер йөрөтә, һөйләшә", - тигәйне. Шулай итеп, кем һәм ниндәй ул Өфө кешеһе?**

# БАШ ҠАЛА КЕШЕҺЕМЕ?

## Ул киң күңелле, алсаҡ, текә һәм... битараф



Һуңғы ваҡытта республикабыҙ ауылдарында һәм ҡалаларында йәшәүселәрҙең күбеһе Өфө кешеһе булып китергә, баш ҡалаға килергә ынтыла. Ҡайһылары хатта ҡыш уртаһында ауылдағы донъяһын ҡалдырып, балалары менән баш ҡалаға килеп, ятаҡҡа урынлаша, ҡуртымға фатир ала, эшкә урынлаша. Ҡасандыр еңел бәхет, оҙон аҡса эҙләп, Урта Азия, Кавказ яҡтарына китеүселәр ҙә, кире ҡайтҡанда, ниңәлер Өфөлә төпләнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Ҡасаҡтар ҙа, күҙ йомоп, тик Өфөгә ынтыла. Был хәл күп яҡтан аңлашыла ла: әгәр ҙә Өфөлә ҡаты бәғерле, таш йөрәкле, һәр кемгә бәйләнеп барған, шөкәтһеҙ һәм йәмһеҙ ҡылыҡлы кешеләр йәшәһә, улар Башҡортостандың баш ҡалаһына күҙ төбәмәҫ ине. Ошоларҙан сығып, шундай һығымта ла яһарға була: Өфө кешеһе киң күңелле һәм итәғәтле. Кешенең нисек булыуы ер-һыуға бәйле, тиҙәр. Тимәк, Өфө кешеһен биҙәгән төп күркәм сифаттарҙың тамырын ошо ер, халыҡ тарихынан эҙләргә кәрәктер. Әммә был юлы мин быны маҡсат итеп ҡуйманым, бары Өфө кешеһенең төп сифаттарының ҡайһыларын ғына билдәләмәксемен.

Армияла хеҙмәт иткәнемдә элекке СССР-ҙың төрлө республикаларынан килеүселәрҙең күбеһе Өфө ҡалаһына мөнәсәбәтле булып сыҡты. Береһе Өфө эргәһенән бер генә тапҡыр үтеп киткән, йәки бер тапҡыр ҡалала булған, икенсеһенең Өфөлә туғандары, дуҫтары бар һ.б.

Өфөгә бәйле бәләкәй генә факт та дуҫлаштыра, айырылмаҫ итә. Өфө һүҙенең изге аураһы бар, ул бер-береһенә ете ят, ҡырҡ ата балаларын дуҫлыҡ, туғанлыҡ һуҡмағынан атлата. Бына ниндәй ҡеҙрәткә эйә Өфө тигән һүҙ! Ә бит тыуған еребеҙ Башҡортостан үҙе лә шундай уҡ ҡиммәттәргә эйә республика.

Рәсәйҙең бик күп ҡалаларында булырға тура килде һәм кешеләрен сағыштырып, шундай һығымта яһаным: Өфө кешеһе, ниндәй генә ҡайғы-хәсрәткә тарымаһын, бер ваҡытта ла күңел торошон тышҡа сығармай, башҡаларға белдермәй. Йәйге йәки ҡышҡы селләме, ел-ямғырмы, буран-дауылмы - бер ваҡытта ла бирешмәй ул. Һауа торошо уның кәйефенә әллә ни тәьҫир итеп бармай ҙа шикелле. Ҡышҡы һыуыҡта туңдырма ашай-ашай, сәбәпле-сәбәпһеҙгә йылмайып-көлөп йөрөүсе Өфө кешеһен дә һәр ваҡыт осратырға була. Өфө кешеһе - оптимист! Уға һоролоҡ, аңлайышһыҙ пессимизм хас түгел.

Өфө кешеһенең яҡшылығын иҫбат итерлек йәнә бер дәлил. Беҙҙә бит хатта баш ҡала милиционерҙары ла үлеп ярата. Ярата ғынамы, хөрмәт итә. Миҫалмы? Булды ундай ваҡиға, тап минең менән. Йәшерәк саҡта төнгә сәғәт 2-ләрҙә ниндәйҙер банкеттан йәйәү ҡайтып киләм. Бер аҙ "йылынып" алғанмын, банкет бит инде. Ҡыш һыуығын тоймайым, тамаҡ туҡ, күңел көр. Ҡапыл артымда милиция машинаһының тормозы һыҙғырған тауышҡа һиҫкәнеп киттем. Боролоп та өлгөрмәнем, ике милиция сержанты мине машинаның артҡы ултырғысына ултыртып та ҡуйҙы. Аңлап торам: егеттәр мине бер ҡайҙа ла алып бармаясаҡ. Протокол яҙыу буйынса төнгө пландарын ғына тултырмаҡсы улар. Был хәлдә яҡшы беләбеҙ бит инде. Сержанттарҙың береһе тубыгына журнал һалып, протокол тултырырға тотонды. "Кем булаһың, ҡайҙа йәшәйһең, эшләйһең, ҡайҙан ҡайтып киләһең", һ.б. Бер графаны сержант тултырмай ҡалдырҙы. Бәҡтиһән, унда мин үҙ ҡулым менән күпме эсеүем тураһында үҙем яҙырға тейеш икәнмен. Ручканы алдым да: "99,8 грамм эстем", - тигән яҙыуҙы сәпәнем һәм күрһәтелгән урынға ҡултамғамды һалдым.

Мине машинанан сығарырға булдылар. Сержант протоколды тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрҙе лә, машинаны ғына түгел, барлыҡ төнгө Өфөнө яңғыратып көлөргә тотонды. Уға водитель менән икенсе сержант та ҡушылды. Тәртип һаҡсыларын "99,8 грамм эстем" тигән яҙыу сығырынан сығарған икән. Ҡайҙа инде мине машинанан төшөрөү, бер минут эсендә яҡын дуҫтарға әүерелдек, хатта адресымды һорашып, йәшәгән еремә тиклем алып барып ташланылар. Протоколды көлә-көлә ҡырҡҡа тураҡланылар. Ана шундай ул беҙҙең Өфө мили...полицияһы! Юморҙы аңлай белеүҙән бигерәк, мине, Өфө кешеһен, яратыуҙан үҙ иттеләр. Әгәр ҙә ошо ваҡиға башҡа ҡалала булды, тиһәләр, һис тә ышанмағыҙ, быңдай хәлдең тик Өфөлә генә булыуы мөмкин. Владимир Маяковский "Минең милициям мине һаҡлай..." тип яҙған саҡта, моғайын да, беҙҙең баш ҡаланы ла күҙ уңында тотҡандыр.

Өфө кешеһен ҡылыҡһырлаған сифаттарҙың тик ыңғайҙарын ғына һанаһам, яҙғандарыма бәрәү ҙә ышанмаҫ ине. Идеаль кеше булмаған кеүек, Өфө кешеһе лә кире сифаттарҙан азат түгел шул. Әйтәйек, Өфө кешеһе республиканың башҡа ерендә булһа, уны урындағы халыҡ өрмәгән ергә ултыртмай, өйөнә алып ҡайта, ҡунаҡ итә, Өфөнән булғаны өсөн генә! Тик шул уҡ кешеләр Өфөгә килеп сыҡһа, Өфө кешеһе үҙен текә тота башлай, ҡасандыр үҙен ҡунаҡ итеүсене күрмәмешкә һалыша. Үәт шулай!

**Һәйүндәк АҪЫЛОВ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө кешеһенен үҙем белгән сифаттары тураһында ҡыҫҡаса ошоларҙы һананым. Нисек кенә булмаһын, Рәсәйҙә "Өфө кешеһе" статусы бар һәм ул башҡа бер ҡалаларҙағына оҡшамаған. Ә мин шул статус менән ғорурмын, текәмен. Ә һеҙ нисек?**

***✓ Ашыҡма. Ашығыу - шайтандан. Мин тишкегә һуҡҡан саҡта уның осо тейергә тейеш урынға ҡарайым. Яндан атҡан саҡта ла шулай - янға ла, уҡҡа ла ҡарама, уҡ тейергә тейеш урынға ҡара.***






Шәғәле Шаҡмандың яны юғалған, тигән хәбәр, пенсия йәшен арттыралар, тигәндән тиҙерәк таралғандыр, моғайын. Социаль селтәрҙәге "Юлдаш ауылы төркөмө"нә төшөп ятҡансы, хәбәр ауылды урап сыҡты. Олораҡтар араһында ахырызаман етеүенә ишара яһаусылар ҙа табылды. Йәштәр иһә был хәлдән хөсөтлөк эҙләп, интернет аша яу һалып, хатта сәйәси яҡтан ҡуйырттылар.

* * *

Ғәле Ҡаһарманович тыуған яҡты өйрәнеү музейына бөгөн бик теләмәй генә килде. Бала башы ҙурлығындағы келәт йоҙағын башбармаҡ йыуанлығындағы асҡыс менән борғослағанда ла элеккеләй аңлашылмаған ләззәт кисерманe. Иғтибарға мохтаж булмаған майланған йоҙаҡ һәр саҡтағылай өн-тынһыҙ асылды. Ғәле Ҡаһарманович ҡараңғы музей эсенә үтте, һәр ваҡыттағыса, йәһәт кенә ут тоҡандырҙы. Шомло тынлыҡ юҡҡа сыҡты, экспонаттар йоҡоһонан көсләп уятылған тере заттар кеүек, музей хужаһына текәлде - хужа уларға баҡты. Һәр ҡомартҡының бында килеп эләгеп, ғүмерҙәрен дауам итеүенең үҙ тарихы бар. Ҡаһарманыч (ауыл халҡы уны шулай атап йөрөтә) экспонаттарҙы үҙ балалары кеүек яҡын күрә. Был сағыштырыу, бәлки, урынһыҙҙыр, бала балаһы балдан татлы тигәндәй, музей етәксеһе ҡомартҡыларға олатайҙарса мөнәсәбәттә. Ул боронғонан ҡалғанды ҡурсалай. Оҙаҡ йылдар берәмләп туплаған болды урлап ҡуймаһындар, тигән хәүеф йылдар үткән һайын, ниңәлер, артҡандан-арта бара.

Болғаныш 90-сы йылдарҙа бурҙар музей ишегендәге йоҙаҡты онтап, үҙҙәре өсөн ҡиммәтле тип тапҡандарҙы алып сыҡҡандан һуң Ғәле Ҡаһарманович күңеленә инеп оялаған шом юҡҡа сыҡманы. Әлегеләй хәтерләй: батша заманынан ҡалған көмөш тәңкәләргә ҡушып, Ленин бабай башы төшөрөлгән тимер бер һумлыҡтарҙы сәлдергәйне бурҙар. Күрәһең, Нух заманынан бирле аҡсалар ҡиммәтен юғалтмайҙыр. "Деньги - зло", тигән осорҙа умыртҡаһы һыуынған Ҡаһарманычтың аҡсалар юғалыуға артыҡ иҫе китмәне. Һуғыш ветерандарына арнап эшләнгән стендтағы орденмиҙалдарҙың юҡҡа сығыуына өҙгөләнде. Кем уйлаған, атайолатайҙарҙың данына ҡул һуҙырҙар тип! "Зингер" тегеү машинаһын алып киткәндәр, күмер һалып йылытыла торған ике үтек юғалған. Бурҙар теймәгән үтектәрҙең табансалары оҙонлоғон үлсәп ҡарағас, милициянан килгән тәфтишсе һығымта яһаны: "Бында музей буйынса спецтар эш иткән, нимә алырға белгәндәр. Эҙҙәренә төшөү енел булмаç".

Тапманылар. Һыуға төшөп батҡандай, юҡҡа сыҡты ҡиммәтле экспонаттар. Музейҙың ағас ишеге тимерҙән эшләнгәненә алыштырылды, әммә Ғәле Ҡаһарманович күңеленә инеп оялаған шик-шөбһә арта төштө. Дәү амбар йоҙағы ла тынысландырманы оло кеше күңелен. Шунан бирле ул көн дә, эшкә йөрөгәндәй, музейға килеп урар булды. Хаҡлы ялға сыҡҡас та эшен йәштәргә тапшырырға баҙнат итмәне. Элек был вазифаһы өсөн эш хаҡы түләнә ине, хәҙер ҡыҫыр рәхмәт иҫәбенә бушлай эшләй. Буштың атаһы үлгән, тиһәләр ҙә, үлмәгән икән, ҡомартҡыларҙың "олатаһы" бушлай эшләргә лә әҙер, тик тарих юғалмаһын, ул төрлө фараздарға ҡоролмаһын, ошо музейҙағы кеүек, ҡомартҡыларға таянһын, боронғо ысынбарлыҡ бөгөнгө ысынбарлыҡҡа үҙ йөҙө менән балҡыһын. Үҙе белгән, үҙе тойған тарихты баҡыйлыҡҡа үҙе менән бергә алып китә алмаçын аңлай Ғәле Ҡаһарманович. Аңлай, әммә музей етәксеһе вазифаһын башҡа кешегә тапшыра алмай - ышанысы юғалған, өмөтө һүрелгән. "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамдарында ауыл тарихы буйынса биш тапҡыр сығыш яһаны. Һәр сығышын үҙе эҙләп тапҡан яңы мәғлүмәттәр менән байытты, тотоп ҡарарлыҡ, ҡолаҡҡа ятышлы дәлилдәр менән оҙон-оҙаҡ һөйләргә тырышты. Байрам биш йылға бер уҙа, тимәк, сирек быуат ваҡыт үткән. Ғәле Ҡаһарманович шуға иғтибар итте: йәштәрҙең үткәндәргә иҫе китеп бармай. Ә ул ана шул тарихты йәштәргә еткерергә ашыға.

* * *

Ғәле Ҡаһарманович музей буйлап йөрөп сыҡты. Бында тынлыҡ, бында һиллек. Ваҡыт, гүйә, туҡтаған. Тормош-көнкүреш әйберҙәренә күҙ йөрөттө. Тыныс тормош өсөн тәғәйен һауыт-һаба, кейем-һалым, эш ҡоралдары - бөтәһе лә зауыҡ менән матурлап-һырлап, семәрләп-биҙәп эшләнгән. Етеш, мул, тулы тормош менән йәшәгән ауылдаштары. Оҫта ҡуллы булғандар, киләсәккә, мәңгелеккә иҫәп тотоп йәшәгәндәр. Экспонатҡа әйләнһәләр ҙә, бөгөн дә йырлап торалар - ал да ҡуллан, халҡың өсөн ғорурлығың кәмемәç.

Уйҙарынан арынып, Ғәле Ҡаһарманович төрлө ҙурлыҡтағы болан мөгөҙҙәре беркетелгән стенаға текәлде. Әйе, Шәғәле Шаҡмандың яны мөгөҙҙәрҙән өҫтәрәк ошо стенала эленеп тора ине! Музейға ингән һәр кем янды ҡулына алырға атлығып торғас, өҫкәрәк, кеше ҡулы етмәç урынға нығытҡайны. Үҙ ҡулдары менән тотороп сығарҙы. Ней исмаһам, теркәү кенәгәһенә яҙып, ҡул ҡуйҙырманы. Айбуллаттың һүҙҙәренә ышанып, уның шауҡымына бирелеп, янды биреп ебәрҙе. Хәҙер килерҙәр, һорау алырҙар, ҡара буяу һөртөп, бармаҡ эҙҙәрен ҡағыҙға төшөрөрҙәр. Иң ҡыйыны ҡағыҙға төшөү. Теге юлы гәйеплене тапманылар, хәҙер бар. Үҙе гәйепле! Яуап бирер. Тәү тапҡыр түгел - күңеле теләмәгәндә эшләп, тәүбәгә килгән саҡтары бихисап. "Виноват, исправлюсь"тан һалдырһа, шул яуапты ғына көткән гәйепләүселәр ғәфү итергә ашыға торғайны. Бөгөн нисек булыр? Полицияға шылтыратмаһа, яндың юғалыуын бер кем дә белмәç ине. Хәҙер беләләр. Бөтә ауыл халҡы белә. Эш ҡағыҙға төшәсәк... Бармаҡ эҙҙәрен аласаҡтар... Айбулатҡа бирҙем, тип әйтмәйәсәк, әлбиттә. Ни тиһәң дә, ул бит нәсел тармағы - ян уға булырға тейеш. Йәштәрҙе яндан атырға өйрәтәм, олимпия чемпиондары тәрбиәләйем, тип янып йөрөгәнендә нисек ҡаршы киләһең инде? Ә полицияға шылтыратмайынса булмай ине, сөнки музейҙағы һәр экспонат өсөн ул яуаплы. Тәртип булырға тейеш. Тик, музей йоҙағын асып ингәндәр, яндан башҡа бер нәмәгә лә теймәгәндәр, тип оло башы менән алдашырға тура киләсәк. Бында бит эш алдауҙа түгел, алданыусыларҙың алданырға әҙер булыуында, тип йыуата үҙен Ғәле Ҡаһарманович. Эҙләп ҡарарҙар ҙа тапмаçтар. Ян ға булдымы улар өсөн ҡиммәтле нәмә?

* * *

Айбулат район үҙәгенә төшкә ҡарай килеп етте. Егерме йыл ситтә йөрөп, Себер гиҙеп, тыуған яғына ҡайтыу менән ауылында өс көн дә тормай, үҙәккә ашыҡты. Сәбәбе лә елле шул: төшөндә олатаһын күргәйне. Бала саҡтағылай күҙ алдына баҫты олатаһы. Йылдар туҙҙырмаған тарамыш кәүҙә, йыйырсыҡһыҙ аҡ һаҡаллы аҡ йөҙ. Башында аҡ түбәтәй. Ҡулына ҡырағай үгеҙ мөгөҙөнән эшләнгән Шәғәле Шаҡмандың яны. "Кайттыңмы? - тип һораны олатаһы, - бына һиңә ян, анау боланды атып ал." Олатаһын ярты һүҙенән аңлап, һәр ҡушҡанын кисектермәй үтәп өйрәнгән Айбулат ул күрһәткән яҡҡа ҡараны. Тап Ирәндек башында мөһабәт болан баҫып тора. Айбулатҡа боландың һәр мускулы күренә, сөм-ҡара төҫтәге тояҡтары ялтлап тора. Байып барған ҡояш болан мөгөҙҙәре араһына төшөп ятҡан. Айбулатты иң аптыратҡаны - боландың төҫө. Улай ҡып-ҡыҙыл төҫтә лә буламы икән болан? Бая олатаһы башлап һүҙ ҡушҡанда үҙен бәләкәй бала итеп тойған Айбулат, боланға ҡарап һоҡлана торғас, үҙен көсө тәненә һыймаған баһадир итеп тоя башланы. "Ат!" тине бит олатаһы. Олатаһы әйткәнде үтәмәй ярамай. Айбулат ҡулындағы ян керешен бар көсөнә тарта. Ай-һай, ауыр икән кереш тартыуы, бармаҡтарҙы ҡанатып, эскә батып инеп бара. Ә уғы ҡайҙа һуң? Уҡһыҙ булмай. Ҡабаланып, ҡулын кесәһенә тыға. Ә унда шаптырлап торған аҡсаларҙан башҡа бер нәмә лә юҡ. "Олатай, уҡтар ҡайҙа?" тип ҡысҡырмаҡ була, тауышы сыҡмай. Үҙен тағы ла бала һымаҡ хис итә. Бая көс ташып торғанда ҡалай рәхәт ине!

Бысылып, тирләп-бешеп уянды Айбулат. Уянғас, бер килке иҫенә килә алмай ятты. Төшөн нисек юрарға ла белмәне. Ғәжәп, олатаһын бер ҙә төшөндә күргәне юҡ ине! Шундуҡ бала саҡ хәтирәләре аңында яңырҙы. Яндан атырға олатаһы өйрәткәйне уны. Башҡа малай-шалай менән уҡ атып йөрөгәнен күреп ҡалды ла янына саҡырҙы. "Йыраҡ осамы уғың?" - тип һораны. Айбулат муйыл ағасынан бөгөп эшләнгән янына кәкре уғын һалып, атып күрһәтте. Әлбиттә, йыраҡҡа османы уғы. Олатаһы арҡаһынан тупылдатып һөйөп: "Иртәгә мин йәйләүгә барам, ер теләһәң, мин һине ысынлап уҡ атырға өйрәтәм", - тине. Ҡаҡ ҡайын менән муйыл ағасынан йәбештереп эшләнгән янды ҡулына алғас, Айбулаттың ауыҙы ҡолағына етте. Әсәһенән әрләнә-әрләнә, ҡаса-боҫа атышыу түгел ине бында, аулаҡта йәне теләгәнсә атасаҡ!

Ҡыуанысы оҙаҡҡа барманы, уҡ атыу урынына олатаһы уға сүкеш менән тишкә тотторҙо. "Мә, балам, ошо ташҡа ырыу тамғаһын сөкөп яҙ әле", - тине. Аптырап торған ейәненә тамғаны ташҡа үҙе сыймаҡлаңы һәм донъяһын онотоп, телен сығарып ташты соҡоған малайҙы күҙәтә башланы. Нығ тырышты Айбулат, сөнки белә: олатаһы бушҡа ҡушмаған. Тыңлашмаһа, яндан атырға өйрәтмәүе лә бар. Таш ҡаты, тишке осонан осҡондар сәсрәп китә. Онотолоп китеп Айбулат яңылыш бармағына тондорҙо. Яра урынынан ҡан бәреп сыҡты. Иламаны, түҙҙе, эшен дауам итте. Ҡулдары талды, күпме тырышһа ла яҙа һуға башланы. Олатаһы ләммим, өндәшмәй күҙәтеп ултыра. Айбулат тағы яҙа һуғып, бармағын ауыҙына тыҡҡас, олатаһы сүкеш менән тишкене алды. "Сүкеш менән һуҡҡан саҡта ҡайҙа ҡарайһың?" - тип һораны. Айбулат танауын мыш-мыш тартып, тишкенең төйәһен күрһәтте. Олатаһы сүкеш менән тишкене алып, үҙе ташты сүкей башланы. Ҡулында уйнаған сүкешкә ҡарап, Айбулат шаҡ ҡатты, бер тапҡыр яҙа һуҡһасы! "Бына, балам, ошолай эшләргә кәрәк", - тип ҡоралдарҙы кире уға тотторҙо. Уҡ сойорғотоу өсөн тәүҙә таш соҡорға өйрәнергә кәрәкме икән, тип уйланы Айбулат. Тағы маташты, тағы яраланды. "Һуҡҡан саҡта ҡайҙа ҡарарға кәрәклеген төшөнмәнеңме ни?" - тип тағы белеште олатаһы. Айбулат өндәшмәне.

- Беләһеңме, ни өсөн мин яҙа һуҡмайым?

- Һин ней, өйрәнеп бөткәнһең, - тип бирешергә теләмәне ейәне.

- Бына, ҡарап күҙәтеп ултыр, мин сүкеш менән һуҡҡан саҡта ҡайҙа ҡарайым? - Олатаһы етеҙ хәрәкәттәр менән таштан осҡондар сәсә башланы. Күпме тырышһа ла аңлай алманы Айбулат - таш соҡоу өсөн дә оҫталыҡ кәрәкме икән ни?

- Аңланыңмы?

- Юҡ.

- Күрҙеңме?

- Юҡ.

Олатаһы сүкеш менән тишкене кире ейәненә бирҙе.

- Иғтибарлы булып өйрән, балам, был - иң мөһиме. Ашыҡма. Ашығыу - шайтандан. Мин тишкегә һуҡҡан саҡта уның осо тейергә тейеш урынға ҡарайым. Яндан атҡан саҡта ла шулай - янға ла, уҡҡа ла ҡарама, уҡ тейергә тейеш урынға ҡара. Күрҙең бит, мин күпме һуҡһам да яҙа һуҡмайым.

- Яндан атҡанда ла яҙа атмайһыңмы? - тип һорай һалды Айбулат.

- Бөгөнгә ошо эшеңде бөт, иртәгә күрһәтермен, - тине олатаһы.

Шулай башланып киткәйне яндан атыу дәрестәре. Күп нәмәгә өйрәтте олатаһы: аяғүрә атырға ла, тубыҡланып атырға ла, хатта йүгереп барышлай сәпте күҙҙән ысҡындырмаҫҡа ла өйрәтте.

**(Дауамы бар).**

✔ *"Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәлә аша Денис Камалетдиновтың радио элементәһе аша татар хеҙмәттәше менән туған телдә һөйләшеп, хәрби операцияны уңышлы үтәүе, иптәштәрен ҡотҡарыуы тураһында уҡып һоҡландыҡ.*



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

**Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге республика премияһы лауреаты, күренекле шағирә, прозаик, публицист, тәржемәсе, Башҡорт АССР-ы XII саҡырылыш Юғары Советының халыҡ депутаты (1991-1995), Башҡортостан Республикаһының 1-3-сө саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаты (1995-2008) Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы Ситдиҡованың тормошо, эшмәкәрлеге - бөтәбеҙҙең дә күҙ алдында. Заман һулышын тойоп, алға ҡарап йәшәй ижад әһеле, уның балаларға арналған хеҙмәте шулай уҡ һоҡланыу уятмай ҡалмай. Әҙибә ойошторған конкурстарҙа йәш быуын ихлас ҡатнаша, бындай сараларҙың балаларыбыҙ талантын асыуҙағы роле баһалап бөткөһөҙ. Ғүмерен башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә арнаған әҙибә виртуаль энциклопедия, мәғлүмәт базаһы булып торған башҡорт Википедияһын тулыландырыуға ла ҙур өлөш индерә. Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы ошо көндәрҙә үҙенең юбилейын билдәләй. Беҙ уның тураһында: "Ижад итә, эшләй һәм башҡаларҙы ла рухландыра", - тип кенә әйтә алабыҙ. Хөрмәтле яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡоваға артабан да ижади уңыштар, сәләмәтлек теләйбеҙ.**

# ИЖАД ИТӘ, ЭШЛӘЙ...
## һәм башҡаларҙы ла рухландыра

➔ **Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы, һеҙ ижтимағи тормошта ҡайнап йәшәгән шәхестәребеҙҙең береһе. Был темпты түбән төшөргәнегеҙ ҙә, һүрелткәнегеҙ ҙә юҡ. Шулай ҙа ниндәйҙер бер осорҙо, йәки йылдарҙы: "Ҡатмарлы һәм бер үк ваҡытта һөҙөмтәле эштәр эшләнгән ваҡыт булды", - тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Бәләкәйҙән әҙәбиәт яраттым, башланғыс кластарҙа уҡығанда уҡ шиғыр тип уйлаған таҡмаҡтар яҙҙым, артабан ярайһы етди рәүештә ижад итә башланым. Ижтимағи тормошта Белорет педучилищеһында уҡыған йылдарҙа ла күпмелер ҡатнаша инем. Тәүге тапҡыр матбуғатта баҫылып сыҡҡан шиғырым "Исемеңде онотма" тип аталғайны, уны мин бөтә ил менән тетрәнеп ҡаралған "Помни имя свое" тигән фильмды күргәндән һуң, концлагерҙа әсәһенән айырылып ҡалған бала йөшендәге улымды ҡосаҡлап илай-илай яҙғайным. Ана шул шиғырымдан башланғандыр ул минең сәйәсәткә, ижтимағи тормошҡа инеп китеүем.

Унан "перестройка" тип аталған илде үҙгәртеп ҡороу башланды, ил Конституцияһынан бер партиялылыҡ тураһындағы пункт алып ташланды. Райком менән ҡала комитеты ҡушылғанда ҡала менән район гәзиттәренең дә ҡушыласағы, башҡортса дубляж булараҡ ҡына сығасағы билдәле булды. Әйтергә кәрәк, тап шул осорҙа халҡыбыҙҙа милли үҙаң уянып китте, республикабыҙҙың статусын киңәйтеүгә йүнәлтелгән хәрәкәт барлыҡҡа килде. Беҙ, "Урал" гәзитендә эшләүселәр, уны башҡортса ғына сыҡҡан үҙаллы гәзит итеп ҡалдырыуҙы юллай башланыҡ. Маҡсатыбыҙға ирештек һәм республика статусын киңәйтеү өсөн хәрәкәткә районыбыҙ халҡын да йәлеп итеүгә өлөш индерҙек. Тап шул мәлдә редакциябыҙға Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева ла килеп, байтаҡ кәрәкле яҙмалар ҡалдырып киткәйне.

Гәзиттәге үткер мәҡәләләрем республика баҫмаларында ла йыш ҡына сыҡты, бына шул рәүештә сәйәсәткә лә инеп киттем. Шәхсән рәүештә "иң ҡатмарлы һәм бер үк ваҡытта һөҙөмтәле эштәр эшләгән ваҡытым", ихтимал, шул булғандыр. Артабан туған телебеҙгә дәүләт статусы яулау өсөн оҙайлы һәм ҡатмарлы осор башланды. Милли хәрәкәткә бик күп ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығырға тура килде, һәм ул эштәрҙә мин әүҙем ҡатнаштым, матбуғатта ла яҙышып торҙом. Билдәле сәбәптәр арҡаһында күрше республиканан байтаҡҡа артта ҡалып булһа ла, был юлы ла маҡсатҡа өлгәштек.

➔ **Һәр заман ил халҡынан рухи ныҡлыҡҡа имтихан ала. Махсус операцияға ҡаршы яуап итеп, Евросоюздың санкциялар иғлан итеүе шулай уҡ рухи берҙәмлеккә бер һынау булып тора. Был осраҡта, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыр өсөн, Рәсәй халҡынан нимә талап ителә, кеше һәм граждан булараҡ, бөгөн ниндәй сифаттар алға сығырға тейеш?**

- Башҡорттар - вәғәҙәһенә тоғро халыҡ. Рәсәйгә ҡушылғандағы килешеүгә ярашлы, быуаттар дауамында илгә хеҙмәт иткән, һаҡлаған, яҡлаған.



Әйтемебеҙ ҙә ниндәй бит әле: яңғыҙ ҡайғы килһә килһен, илгә ҡайғы килмәһен. Үҙ ҡайғыһын түгел, ил ҡайғыһын күңеленә яҡын ҡабул иткән, көнҙәк итеп күргән, унан сығыу өсөн бөтә көсөн һалған халҡыбыҙ. Илем өсөн тип баш һалған башҡорт һөйкәтәре ҡайҙа ғына ятып ҡалмаған! "Любизар", "Һыр", "Порт-Артур" кеүек йырҙар шуға ла нисәмә быуаттар буйы халыҡ хәтерендә һаҡланып килгән.

**Ил күргәнде күрәбеҙ. Ошо ҡатмарлы мәлдә аҫыл ир-егеттәребеҙҙе юғалтабыҙ, уларҙың ата-әсәһенә, туғандарына сабырлыҡ теләйем. Шундай ваҡытта йәмғиәтебеҙ ҙә уларға терәк булырға тейеш, бигерәк тә рухи ярҙамға мохтаж улар. Ә егеттәребеҙ ниндәй: ҡаһарманлыҡтары өҫтөнә тапҡыр ҙа, зирәк тә, телебеҙгә лә тоғро бит улар. Бына әле генә "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәлә аша Учалы районынан Денис Камалетдиновтың радио элементәһе аша татар хеҙмәттәше менән туған телдә һөйләшеп, хәрби операцияны уңышлы үтәүе, иптәштәрен ҡотҡарыуы тураһында уҡып һоҡландыҡ. Ысын заман геройы бит инде был милләттәш егет!**

Беләһеңме, Фәрзәнә һылыу, мин халҡыбыҙҙың бөгөнгө шарттарҙа ауылдан айырылып бөтмәүенә һөйөнәм. Донъя буйлап аслыҡ, аслыҡ янай, тип көнө-төнө туҡыйҙар, ә миненсә, беҙҙең эшсән, ергә тоғро халҡыбыҙ быға юл ҡуймаҫ. Хәҙер заман ҡорамалдарын ҡулланып, ҡура тултырып мал тотҡандар ҙа бар, үҙе өсөн генә йәшелсә-емеш, бәрәңге сәсеп, тауыҡ булһа ла аҫрап, көн итергә тырышҡаны ла маҡтауға лайыҡ, үҙе лә асыҡмаҫ, ҡаланы ла ас итмәҫ.

Иң мөһиме, динебеҙ өйрәткәнсә, төшөнкөлөккә бирелмәҫкә, вәсвәсә һалып, йыйын юҡ-бар хәбәр таратмаҫҡа, ҡулдан килгәнсә файҙалы ғәмәл ҡылырға кәрәк.

➔ **Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы, бер йылды "Киске Өфө" сәсәндәр бәйгеһе үткәргәйне. Бигерәк тә шундағы һеҙҙең әйтеште һоҡланып уҡып барғайныҡ. Шул саҡта һеҙҙә сәсәнлек һәләте лә барлығын белдек. Хоҙайҙан бирелгән был талантығыҙ ижадығыҙҙа нисек сағылыш ала, ғөмүмән, сәсәнлек традицияһына һеҙҙең ҡараш нисек?**

- Үҙемдә әллә ни сәсән тип һанамайым былай. Мәгәр һәләтем бер аҙ булған шикелле. 2015 йылда үткәрелгәйне ул бәйге. Мин осраҡлы ғына ҡушылып киткәйнем, ҡушамат алып ҡына алыштыҡ. Көнәркәшем Айыткужа исеме менән бәйгегә сыҡты, мин атам төбәгендәге бала сағымда һыулап, ярҙарында елләгән йыйын үҫкән Өшөрә йылғаһы исеменә йөшендем. Кемгә яуап биргәнемде хатта үҙем дә белмәнем. Аҙаҡтан, бүләкләү тантанаһына Салауат районы һабантуйына барғас ҡына, Әкрәм Ҡәйепҡолов атлы сәсән менән әйтешкәнде белдем. Уға рәхмәт - тос-тос, үткер генә фекерҙәр ҡорого ташлап, мине лә баш бирмәй алышырға мәжбүр итте.

Уйламағанда, гәзиттәге әйтеш Айҙар Байыҡ сәсән бәйгеһенә лә ҡушылып китеп, гран-при менән бүләкләнеп ҡуйҙым. Бүләкте миңә профессор Әхмәт ағай Сөләймәнов тапшырыуы үҙе бер иҫтәлек булып ҡалды.

Әйткәндәй, бәләкәй саҡта өләсәйем берәй нәмә өсөн киҫәтһә, минең уға ҡайтарып, үҙемдекен ҡуймай, таҡмаҡ менән яуап бирә торған ғәҙәтем бар ине. Өләсәйем, аптырағас, "Һай сәсән!" тип туҡтап ҡалғаны иҫкә төштө.

Таҡмаҡтарҙы бик ябай ғына, хатта примитив жанр тип баһалаусылар ҙа бар. Ә миненсә, тап улар - сәсәнлек мәктәбе, күпме тапҡыр, шаян, образлы, шул уҡ ваҡытта уйнап ҡына әйтелһә лә, уйлап әйтелгән яуаптар бар уларҙа. Беҙҙең быуын ауыл йәштәре шул мәктәпте үтеп тәрбиәләнде. Аҙаҡтан уны музыка ҡоралдары, магнитофон иһә таҡмаҡҡа бейеүҙәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарҙы, бер иҫ киткес рухи хазинабыҙҙы юғалтҡан кеүек күрәм мин. Телде лә, зиһенде лә үткерләй ине бит ул таҡмаҡтар!

Мин ярайһы йыш хикмәт жанрында ижад итәм. Был жанр ҡобайырҙарыбыҙ менән дә ауаздаш. Поэмаларымды ла ҡобайыр рәүешләрәк яҙылған тип әйтеүселәр бар. Әйнә лә, мин Аҡмулла шиғриәтенә ғашиҡ, әйтештә яуаптарымды ла уның шиғри үлсәме менән биргәнмен.

Ҡыҙғаныс, башҡаса әйтеш бәйгеләрендә ҡатнашырға тура килмәне. Ә бит әле лә сәсән рухлы шәхестәребеҙ бар бит ул.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**яҙып алды.**

*ЗАУЫҠ*

*Гүзәл СИТДИҠОВА*

# ЮҒАЛМАУЫ ҠИММӘТ БЫУАТТАРҘА
## Башҡорт тигән исем-атының

### Быяла

Керпек ҡаҡҡан һайын донъя бүтән -
Һиҙҙермәйсә офоҡ шыуышҡан,
Кемдер тыуған, кемдер баҡый киткән,
Өмөтһөҙгә өмөт тулышҡан.

Кире ҡайтмаҫ булып япраҡ осҡан,
Һөйөм тигән кемдер йәренә,
Кемдер атҡан дошманына тоҫҡап,
Кемдер тейгән дуҫтың гәренә.

Һөйөнөслө хәбәр килгән кемгә,
Ялғанмаҫтай ептәр ялғанған,
Керпек ҡаҡҡан йәйгә уттар һүнгән,
Кем алдаған, кемдер алданған.

Але генә ап-аҡ тигәнеңде
Бер һүҙ генә мана ҡараға;
Юғалтыуҙар менән табыштар ҙа
Һыйып тора ошо араға.

Керпек ҡаҡҡан мәлгә тиклемгеләр -
Ыуалып та төшкән быяла...
Бер ғүмерҙә беҙ йәшәйбеҙ икән
Секунд һайын яңы донъяла.

### Башҡорт ҡатыны

Уралымдың сикһеҙ хазинаһы,
Балҡып ята алмас, алтыны,
Тик алмастан, алтынынан ҡиммәт
Аҫылташ ул - башҡорт ҡатыны.

Тарихыбыҙ ҡанға баткан мәлдә
Ғазаптарҙы күпме татыны -
Дошмандарға йәшен күрһәтмәне,
Бирешмәне башҡорт ҡатыны.

Хәйләләргә артыҡ оҫталыҡ юҡ,
Телебеҙ ҙә ҡай саҡ ҡатылыр,
Тик изгелек - ҡандан килгән сифат,
Тоғролоҡло башҡорт ҡатыны.

Һынағанда яҙмыш рух ныҡлығын,
Йән һаҡлаған кемдер һатылып,
Утта янған, ләкин сукынмаған
Иман һаҡлап башҡорт ҡатыны.

Улҡайҙары яуға киткән саҡта
Ауыҙында ҡара ҡан тулы,
Еңеп ҡайт, тип, илде һаҡла, тиеп
Фатихалай башҡорт ҡатыны.

Юғалмауы ҡиммәт быуаттарҙа
Башҡорт тигән исем-атының,
Бының өсөн мең-мең һиңә рәхмәт,
Бөйөк әсә - башҡорт ҡатыны!

### Юрған

Юрған күбей инәйҙәрем,
Мең сәнсем биҙәктәре,
Һеңлекәшкә тигән бирнә -
Өҙөлә үҙәктәрем.
Һеңлекәшем, эс серҙәшем,
Уңһаҡсы йәр генәндән,
Бәхет доғаһы һырылһын
Ҡулыңдағы энәңдән.
Тәнегеҙҙе генә түгел
Йылытһын йәнегеҙҙе,
Белмәһен күбелгән юрған
Ситләшкән мәлегеҙҙе.
Бергә туҙҙырырға яҙһын,
Бергә уңһын төҫтәре.
Оягыҙға ҡот килтерһен,
Йоҡһон бәпәй еҫтәре.
Икегеҙгә инсәләнгән
Яҫтыҡ ул - кесе тирмә.
Юрған күбей инәйҙәрем,
Һеңләмә тигән бирнә.

✓ *Ә беҙҙә "Урал батыр" эпосының геройҙары һәр балалар баҡсаһында ла бармы? Балаларыбыҙ Аҡбуҙат урынына единорог, боронғо башҡорт яугирына хас булат ҡылыс урынына Дарт Вейдерҙың яҡтыртҡыс ҡылысын уйнатып йөрөй.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙҘЕ КҮП ИТЕП...

## тик һөтһеҙ эс

■ Тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы эшмәкәрлеге боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ балансының үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейененң дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһын ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Профессор Даниэль Якубович әйтеүенсә, иртән мотлаҡ шоколад ашаһаң, көнө буйы татлы ризыҡтар ашағыһыҙ килмәйәсәк.

■ Инглиз ғалимы, Лондон университетының фитохимия профессоры Симон Гиббонс раҫлауынса, көнөнө өс сынаяҡ ҡына яңы бешерелгән сәй эсеү сәләмәтлектә һаҡларға мөмкинлек бирә. Сәй эсергә ғәҙәтләнеү баш мейеһе шеше, инсульт, төрлө инфекциялар кеүек ауырыуҙарҙы булдырмай. Нидерланд ғалимдары 1996 йылда уҡ сәй эсергә яратыусыларҙа инсульт һирәк осрауын билдәләгән. Ҡара сәйҙәге флавоноидтар артерияларҙы һәм ҡан тамырҙарын зарарлы холестериндан һаҡлай. Белгестәр әйтеүенсә, бында сәйҙең йәшел йәки ҡара, шәкәрле йәки шәкәрһеҙ булыуы мөһим түгел. Сәйҙе тик һөтһөҙ эсергә кәрәк, сөнки һөт организмға эсемлектең файҙалы матдәләрен үҙләштерергә ҡамасаулай.

■ Бөйөк Британияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид ликопен менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

■ Компьютер артында оҙаҡ эшләргә тура килһә, иң тәүҙә күҙҙәргә мөмкин тиклем әҙерәк зарар килтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Америка ғалимдары күҙҙәр өсөн иң зыянһыҙ компьютер шрифтын асыҡлаған. Эксперименттар күрһәтеүенсә, иң хәүефһеҙ шрифт тип Verdana асыҡланған. Хәрефтәрҙең иң оптималь варианты тип 10-12 пункт билдәләнгән. Белгестәр әйтеүенсә, Verdana шрифтында хәрефтәр аҫтан һәм өҫтән график штрихтар менән билдәләнмәй, шуға ла күҙҙәр аҙыраҡ арый. Табиптар шулай уҡ мониторға күҙҙәрҙе ҡыҫып ҡарамаҫҡа кәңәш итә.

ЗАМАНСА...

# ИҢ ТӘҮҘӘ - ТУҒАН ТЕЛ!

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты филология факультеты уҡытыусылары Ләйлә Хөсәйенова менән Зөләйха Хәбибуллина Саха Республикаһында (Яҡутстан) мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларындағы тәжрибәне өйрәнеү маҡсатында эш сәфәрендә булып ҡайтты. Уның һөҙөмтәләре тураһында факультеттың деканы, филология фәндәре докторы Ләйлә ХӨСӘЙЕНОВА һөйләнә.**



- Был Рәсәй Мәғариф министрлығының "Күп мәҙәниәтле белем биреүҙең полилингваль моделен индереү тәжрибәһен сағыштырма тикшереү" проекты буйынса беҙ икенсе йыл эшләйбеҙ, төрлө төбәктәрҙә полилингваль белем биреүҙе ниндәй дәрәжәлә, нисек итеп ойоштороуҙарын өйрәнәбеҙ. Вуз ғалимдары өс төркөмгә бүленеп, былтыр Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан, Чечня, Ҡабарҙы-Балҡар, Төньяҡ Осетия-Алания һәм Саха (Яҡутстан) республикаларында мәктәптәрҙә тикшеренеүҙәр үткәрҙек, быйыл иһә балалар баҡсаларына юл тоттоҡ. Коллегам Зөләйха Хәбибуллина менән Яҡутстанда 4 көн булдыҡ һәм 3 балалар баҡсаһының мәктәпкә әҙерлек төркөмөнә йөрөгән 6 йәшлек тәрбиәләнеүселәренә яҡут, рус һәм инглиз телдәрен өйрәтеү кимәлен тикшерҙек. Төбәктәге мәғариф учреждениеларында яҡут телен өйрәтеү бик яҡшы ҡуйылған, барлыҡ хеҙмәткәрҙәр ҙә был телде яҡшы белә һәм балалар шул мөхиттә үҫә, барлыҡ саралар ҙа шул телдә уҙғарыла. Шулай уҡ ике ҡатлы балалар баҡсаһында баҫҡыстар төрлө төҫкә буялып, төҫтәр өс телдә яҙылыуына һәм һандар тәшөрөләүенә иғтибар иттек. Бала баҫҡыстан менеп-төшөп йөрөгәндә лә һанап, төҫтәрҙе атап, уҡый белгәне өс телдә уҡып китеп бара ала. Тимәк, дәрестән тыш та улар телде ҡуллана.

Яҡуттарҙың тағы бер өлгө алырлыҡ эш һөҙөмтәһен күреп ҡайттыҡ. Улар милли кейемдәрен көндәлектә кейеп йөрөй, үҙ йолаларын атҡара һәм балалар бәләкәйҙән быларҙы күреп-белеп үҫә, милли аш-һыуҙарының, йолаларға бәйле ғөрөф-ғәҙәттәренең атамаһын, асылын белә һәм шул мөхиттә тәрбиәләнә. Бынан тыш, балалар халыҡ ауыҙ-тел ижадын яҡшы белә, героик эпостарының персонаждарын һынландырған ҡурсаҡтарҙы уйната. Беҙ булған 3 балалар баҡсаһында ла олонхо геройҙарының ҡурсаҡтары булды, балалар уларҙың барыһын да таный, был Нургун батыр тип уйнап ултыра. Һәм ул ҡурсаҡ ысынлап та олонхола әйтелгәнсә һынландырылған. Ә беҙҙә "Урал батыр" эпосының геройҙары һәр балалар баҡсаһында ла бармы? Ғөмүмән, ундай комплектты күргәнем дә юҡ. Балаларыбыҙ Аҡбуҙат урынына единорог, боронғо башҡорт яугирына хас булат ҡылыс урынына Дарт Вейдерҙың яҡтыртҡыс ҡылысын уйнатып йөрөй. Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа башҡорт телен үҫтереү йәһәтенән төрлө эштәр эшләнә, шулай ҙа халҡыбыҙҙың мираҫын балаларыбыҙ кескәйҙән яҡын күрһен, үҙ итһен өсөн яҡуттарҙың был өлгөһөнә иғтибар итергә кәрәктер.

Артабан коллегаларҙың башҡа төбәктәрҙә үткәргән тикшеренеүҙәрен, шул иҫәптән Башҡортостан балалар баҡсаларындағын да дөйөмләштерергә кәрәк буласаҡ. Әлегә Өфөнөң бер нисә мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында булдыҡ, беҙҙең полилингваль белем биреү йәһәтенән уртаҡлашыр тәжрибәбеҙ барлығын белдек. Беҙҙә полилингваль балалар баҡсалары һәм күп телдәр өйрәткән төркөмдәр асыла ул. Әммә полилингваль балалар баҡсаһы йә мәктәп - ул тәү сиратта туған тел (беҙҙә башлыса башҡорт теле), рус теле һәм сит тел өйрәтелгән учреждение тигәнде аңлата. Тимәк, бала тәү сиратта башҡортса белергә тейеш, шунан рус теле һәм сит телде өйрәнә. Бында мәғариф учреждениеларының атай-әсәйҙәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш булыуы көн кеүек асыҡ, сөнки бала бөтә телдәрҙе белеүҙе лә берҙәй мөһим тип иҫәпләргә, һәр береһен яҡшы кимәлдә өйрәнергә бурыслы.

Полилингваль белем биреү бөгөнгө глобаллләштереү шарттарында бик әһәмиәтле йүнәлеш, балаларға бер телде генә белеү етмәй хәҙер. Ә был үҙ сиратында кәрәкле кадрҙар әҙерләү һәм уларға тәғәйен уҡытыу-методик әсбаптар булдырыу мәсьәләһен алдыбыҙға ҡуя. Икенсеһе буйынса Башҡортостанда әүҙем генә эш алып барыла, дәреслектәр сығарыла. Ә бына кадрҙарға килгәндә, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ был йәһәттән эш башланы: былтыр башланғыс кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары һәм башҡорт теленән мәктәпкәсә белем биреү педагогы әҙерләү бүлектәрен астыҡ. Быйыл башҡорт теле һәм әҙәбиәтен белгән тәрбиәсе-логопед һөнәренә уҡырға теләүселәрҙе ҡабул итәсәкбеҙ, бюджет урындары булдырылған. Былар барыһы ла республикала күп телдәрҙе белгән балаларҙы уҡытыу-тәрбиәләү буйынса эшебеҙҙе һөҙөмтәләрәк итер, тип ышанабыҙ.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# УРМАНДЫ ЯРАТҺАҢ...

**ҺОРАУ: "Мәктәпте тамамлаусылар киләсәк һөнәрен һайлау алдында тора. Һеҙҙең уҡыу йортоноң, уларҙың ошо юҫыҡтағы ниәтен, маҡсатын, хыялын тормошҡа ашырыр өсөн, заманға ярашлы ниндәй тәҡдиме бар?"**

***Фуат ДӘМИНДӘРОВ, Өфө урман техник техникумы директорының тәрбиә эше буйынса урынбаҫары:*** Бөгөн мәктәптәрҙең сығарылыш синыф уҡыусылары юл сатында тора, тиергә лә мөмкин, сөнки улар үҙҙәрененң күңелдәренә яткан һөнәр һайларға тейеш. Уның заманға ярашлы ғына түгел, күңеле тартҡан булыуы ла зарур. Ни тиһәң дә, яратҡан эште башҡарғанда уның ауырлығы ла, ҡатмарлылығы ла тойолмай, ә күңел ҡыуаныс таба.



Был йәһәттән Өфө урман техник техникумы урман һәм урман паркы, машиналарҙы техник эксплуатациялау, ағас эшкәртеү технологияһы, ер төҙөләшә, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре, баҡса, парк һәм ландшафт төҙөлешө йүнәлештәре буйынса көндөҙгө бюджет һәм коммерция бүлектәрендә һөнәр алырға саҡыра. Бының өсөн хатта баш ҡалаға килеп йөрөү ҙә кәрәкмәй, бары тик документтарҙың күсермәләрен 1 июндән 15 августа тиклем хат аша ебәрергә йәки электрон форматта тапшырырға мөмкин. Ситтән тороп уҡыу бүлегенә документтар 31 августа тиклем ҡабул ителә.

Урман-техник техникумы тип аталһаҡ та, уҡыу йортонда ижади һәләт тә кәрәк, сөнки баҡса, парк һәм ландшафт төҙөлешө бүлеген һайлаусыларҙан мотлаҡ фантазия, ижади ҡараш талап ителә. Шуға күрә был йүнәлештәрҙе һайлаусылар документтарын 10 августа тиклем тапшыра һәм уларға ижади һынау ҙа үткәрелә.

Техникумда тәрбиә эшенә ҙур иғтибар бирелә. Теләүселәр буш ваҡытын төрлө түңәрәктәрҙә, секцияларҙа файҙалы итеп үткәрә. Техникумыбыҙ спортсылары республика колледж-техникумдары араһында уҙғарылған төрлө спорт ярыштарында призлы урындар яулай, мәҙәни сараларҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған Бөтә Рәсәй йәш һөнәрмәндәр конкурсында ла ҡатнашабыҙ.

Техникум уҡытылған һөнәрҙәр буйынса республиканың билдәле предприятиелары, шулай уҡ юғары уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итә.

Уҡыу йортоноң үҙенең ашханаһы бар һәм студенттар оҙон тәнәфестә унда комплексы туҡлана ала. Республика районҡалаларынан килгән егет-ҡыҙҙарға дөйөм ятаҡтан урын бирелә.

Әгәр уҡыу йорто тураһында күберәк мәғлүмәт алырға теләһәгеҙ, уның сайтына инеп, барлыҡ ҡыҙыҡһындырған һорауҙарығыҙға яуап алырға мөмкин.

**✓ Лицейҙы яңыртыу эштәренә килгәндә, тағы бер шатлыҡлы хәбәребеҙ бар: быйыл башҡорт теле кабинеттарын модернизациялау проектына индек, әле бына өр-яңы кәрәк-яраҡты ҡулға алырға торабыҙ.**



*БАШ ЙОРТТА*

# БАШҠАЛАРҘАН ҠАЛЫШМАЙБЫҘ,

## уҙып та китәбеҙ әле!



**Баш ҡаланың белем усаҡтарындағы хәлдәрҙе һорашып-белешеүҙе дауам итәбеҙ. Был юлы вазифаларына яңыраҡ тәғәйенләнгән йәш етәкселәрҙең уҡыу йылы аҙағына эш һөҙөмтәләре, ҡаҙанған уңыштары, борсоған һорауҙары тураһында белештек.**

***Ришат КАМАЛОВ, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы директоры:*** М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһына ярты йыл етәкселек итеп өлгөргән арауыҡта ҡайһы бер ғорурланырлыҡ ҡаҙаныштарыбыҙҙы телгә алырға мөмкин. Бында, һис һүҙһеҙ, гимназияла тупланған алдынғы педагогтар, һиҙгер атай-әсәйҙәр, маҡсатлы уҡыусыларҙың һәм быға тиклем улар менән оҫта етәкселек иткән Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиеваның ҡаҙанышы ҙур. Уларға мине күтәрмәләп, эшемдә ҙур терәк булыуҙары өсөн рәхмәтлемен.

Яңы йәй башланып тороуына ҡарамаҫтан, уҡыу йылының "себештәрен" һанар мәл әле. Беҙҙең гимназистар төрлө кимәлдәге олимпиада, ярыш, конкурс һәм сараларҙа бик әүҙем ҡатнашты, теүәл, тәбиғи һәм гуманитар фәндәр менән бер рәттән, спортта ла һынатманы. Мәҫәлән, республикала географиянан Асман Ҡарағоловҡа етеүсе булманы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Сәлимә Яҡупова, һыҙманан Дамир Вәлиев, экологиянан Гүзәл Баһауетдинова һәм Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихынан Наҙгөл Ҡолтаева кеүек алдынғы уҡыусыларыбыҙ муниципаль һәм республика кимәлдәрендә беренсе урын алдылар. Ике тиҫтәлек юбилейын билдәләгән "Шаяниум" ҡала конкурсында быйыл беҙ тағы ла алдынғылыҡты бирмәнек. Быларҙан тыш, гимназияның үҙенең матур йолаға әүерелгән саралары күп, уларҙа Мостай Кәрим исемендәге Фонд менән берлектә тормошҡа ашырылғандары бихисап.

Бөгөнгө мәшәҡәттәребеҙ тураһында һөйләгәндә инде, киләһе уҡыу йылына әҙерлек бара. Сығарылыштарҙың имтихандарын түҙемһеҙлек менән көткән арала йәйге каникулдар башланды һәм беҙҙең гимназияла балалар лагерҙары эш башланы. Улар өс сменала буласаҡ, беренһендә йөҙәрләгән бәләкәй класс уҡыусылары ял итһә, икенсеһе үсмерҙәр өсөн хеҙмәт һәм ял лагеры булараҡ ойоштороla. Һуңғыһына йөрөгән уҡыусылар гимназия территорияһында ҡушылған ваҡ-төйәк йомоштарҙы үтәп, хеҙмәт тәмен татый аласаҡ. Сөнки уларға эш хаҡы түләү ҙә ҡаралған.

Киләһе уҡыу йылына әҙерлек тә гөрләй: апрель айында уҡ 1-се синыфҡа уҡырға килергә теләгән бәләкәстәрҙән алты класс туплап ҡуйҙыҡ, илдең алдынғы вуздары менән килешеүҙәр төҙөнөк һәм уларҙың ярҙамында махсус класс бүлмәләрен кәрәкле техника менән йыһазландырабыҙ, гимназияның матди-техник базаһын нығытыу йәһәтенән эшмәкәрлек алып барабыҙ. Әйткәндәй, 900 балаға иҫәп тотоп төҙөлгән гимназияла быйылғы уҡыу йылында 1220 бала уҡыһа, киләһендә - 1350 тирәһе тип көтөлә. Шулай уҡ беренсе сентябрҙән Мәскәү физика-техник институты менән килешеү төҙөнөк һәм башланғыс синыфтарҙан алып теләге булған һәр баланы ошо йүнәлештә өҫтәмә уҡытасаҡбыҙ. Уларға Мәскәүгә барып, белемдәрен камиллаштырыу мөмкинлеге лә биреләсәк. Шулай уҡ республиканың алдынғы юғары уҡыу йорттары менән даими бәйләнештә эшләйбеҙ, улар ярҙамында махсус йыһазландырылған бүлмәләребеҙ бар, өлкән синыфтарға төрлө профилле белем биреүҙә лә төп ярҙамсыларыбыҙ улар.

***Миләүшә МЫРҘАҒӘЛИНА, Ғ. Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейы директоры:*** Уҡыу йылы тамамланған мәлдә беҙҙең дә хәстәрҙәр барыһыныҡы кеүек инде. Быйыл лицейҙа барлығы 423 бала уҡыны, уларға 26 юғары квалификациялы педагог белем бирә. Уҡыу йылы гөрләп үтте, коллегаларым менән эшебеҙҙең матур ғына һөҙөмтәләрен күреп ҡыуандыҡ. Мәҫәлән, лицейҙың "Тағы ла "ике" КВН-командаһы "Шаяниум" ҡала конкурсында ла, Башҡорт асыҡ КВН лигаһының уйындарында ла икенсе урын яуланы, унда уйнаған Ангелина Халиҡова исемле бик талантлы уҡыусыбыҙ икеһендә лә "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында билдәләнде. "Башҡорт телен популярлаштырыу буйынса иң яҡшы социаль ролик" тигән конкурста ҡатнашып еңеү яулауыбыҙ - беҙҙең өсөн иң ҙур ҡаҙаныш.

Билдәле башҡорт яҙыусыһы Ғәли Ибраһимовтың исемен йөрөткән лицейҙа быйыл Бөйөк Еңеүҙең 77 йыллығына һәм шәхестең иҫтәлегенә арналған матур ғына хәтер кисәһе ойошторҙоҡ. Һөҙөмтәлә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир-яҙыусының ижадын, уның шәхесен балалар яҡшыраҡ белһен өсөн был сараны һәр йыл үткәрергә ниәтләнек. Әйткәндәй, мәктәбебеҙҙең бер быуаттан артыҡ тарихы бар һәм музейҙа байтаҡ ҡомартҡылар тупланған, әле шуны яңыртыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Ошонда ҡасандыр парта артында бар донъяға билдәле балет бейеүсеһе Рудольф Нуриев, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы Рәғиҙә Янбулатова, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова ултырған. Белем усағын астырыу өсөн тәүге директор Закир Шакиров күпме көс һалған. Быларҙың барыһын да тиҙҙән заманса музейыбыҙҙа күрә аласаҡһығыҙ.

Лицейҙы яңыртыу эштәренә килгәндә, тағы бер шатлыҡлы хәбәребеҙ бар: быйыл башҡорт теле кабинеттарын модернизациялау проектына индек, әле бына өр-яңы кәрәк-яраҡты ҡулға алырға торабыҙ. Шулай уҡ балалар яратып шөғөлләнгән ҡурайсылар һәм бейеүселәр түңәрәктәренә бер иштән зауыҡлы башҡорт милли кейемдәре тектереп алдыҡ. Был сәнғәткә ғашиҡ балаларыбыҙҙың күңеленә хуш килде. Балалар фекерҙәрен матур итеп башҡортса әйтеп өйрәнһен, телмәрҙәре шымарһын, журналист һөнәрендә үҙҙәрен һынап ҡараһындар өсөн "Ауаз" тигән медиа-үҙәк асырға хыялланып йөрөйбөҙ. Тағы ла быйыл Башҡортостан Мәғариф министрлығы һәм Өфө ҡала хакимиәте ярҙамында "Биҙәк" республика конкурс-фестивален үткәрҙек. Унда 200-ҙән ашыу ҡатнашыусы үҙ халҡының уйын ҡоралында уйнаны, халыҡ йырҙарын һәм бейеүҙәрен башҡарҙы.

Киләһе уҡыу йылына 5-се синыфтарҙан "Шайморатов кластары", 8-селәрҙән кадет кластары ойошторабыҙ, 10-сыларҙан социаль-иҡтисади йүнәлештә уҡырға теләгән балаларҙы туплайбыҙ. Өлкән синыфтарҙа Башҡорт дәүләт университеты менән тығыҙ эшләйбеҙ. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ беҙҙә "Башҡорт туған телен тәрәнәйтеп өйрәнеү буйынса берҙәм мәғариф киңлеге" тигән проектын тормошҡа ашырҙы һәм уҡытыусыларыбыҙ төрлө юҫыҡта оҫталыҡтарын камиллаштырҙы.

Беренсе уҡыу йылын бына шулай тамамлап торам был лицей менән һәм бында барыһының да мине йылы ҡабул итеүҙәре, күтәрмәләп тороуҙарына рәхмәтлемен. Былтыр лицейҙа 390 бала уҡыһа, быйылғы уҡыу йылында 423 булды, киләһе уҡыу йылына тағы 50 беренсе класс уҡыусыһы килер, тип көтәбеҙ. Әле беҙҙең микрорайонға ҡараған атай-әсәйҙәрҙән ғаризалар йыйыу бара, 6 июлдән бында теркәлмәгәндәрҙе лә ҡабул итә башлайбыҙ. Алтын шулай бөртөкләп йыйыла инде. Күп кенә башҡорт ғаиләләренән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн махсус класс асыуҙы һорап мөрәжәғәт иткәндәре бар, был мәсьәләне лә ыңғай хәл итеп булыр тип уйлайым. Тик бер генә күңелде өйкәгән нәмә бар: башҡа милләт вәкилдәре балаларын беҙгә бик теләп алып килгәндә, үҙебеҙҙекеләр ҡайһы саҡта беҙҙе урап үтә. Ә беҙ күпме көс түгеп, урыҫ балаларына башҡорт телен, мәҙәниәтен, сәнғәтен, тарихын өйрәтәбеҙ. Беҙҙә уҡығас, күңелендә башҡорт халҡына, тыуған төйәгебеҙгә ҡарата һөйөү, ихтирам бөрөләнһен, тибеҙ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Нисек икенсе кеше менән яҡынайырға?

Бөтөн кешелекте яратыуҙан алда кешеләрҙе яратырға өйрәнергә кәрәк. Кешеләрҙе яратыуҙан алда аныҡ кешене яратырға өйрәнергә кәрәк. Аныҡ кешене яратыуҙан алда, уны яҡшы аңлау өсөн уның менән яҡынайырға кәрәк.

Бында "яҡынайыу" һүҙе енси мөнәсәбәтте түгел, ә киңерәк, дөйөм кешелек мәғәнәһендә бирелгән. Кешене белеү, уға яҡынайыу өсөн һеҙ уның ыңғай яҡтарын һәм етешһеҙлектәрен, ҡиммәттәрен һәм инаныуҙарын, нимә оҡшағанын, нимә оҡшамағанын белергә тейешһегеҙ.

Быны ситтән тороп эшләп булмай. Әммә кеше менән нисек яҡынайырға? Әгәр үҙегеҙҙе һалҡын, дошмандарса һәм хис-тойғоһоҙ итеп күрһәтһәгеҙ, әлбиттә, ситкә этәрәсәкһегеҙ. Әммә барыһы ла юғалмаған әле. Беҙҙең көндәрҙә лә ярҙамы ҙур булған боронғо алымдар йәшәй. Беҙ уларҙы мөғжизә тип түгел, ә үҙенде үҙгәртеү ҡоралы тип ҡабул итәбеҙ. Бары тик шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: улар ярҙам итә. Бәлки, уны берберҙәр ҙа уйлап тапмағандыр, әммә боронғо халыҡтар уны ҡулланған.

Стивен менән Люсиль өйләнешергә йыйына, әммә Люсиль үҙенә ныҒыраҡ кәрәк булған кешене осрата. Стивен үҙен кәмһетелгән итеп тоя һәм төшөнкөлөккә бирелә. Әммә бер аҙҙан һуң метафизик аҡылын ҡулланып, Люсилде кире ҡайтарырға ҡарар итә.

Люсиль Стивенда һыбай йөрөү костюмын онотоп ҡалдырған була. Стивен креслоға ултырып, ошо кейемде тубығына һала, өс тапҡыр тәрән итеп тын ала һәм кейемде Люсилдең үҙе тип күҙ алдына килтерә. Ул әйберҙе, әйтерһең дә, Люсиль уның мөхәббәтен тойған кеүек күҙ алдына килтереп, иркәләй. Уйынан ғына: "Икәү бергә беҙгә бик яҡшы буласаҡ", - тип ҡабатлай. Әммә күҙен асып ысынбарлыҡҡа ҡайтҡас та кейемде ташлап ҡуймай, уны һәр саҡ үҙе менән машинаһында йөрөтә, йоҡлағанда эргәһенә алып ята. Бер нисә айҙан Люсиль шылтыратып, үҙен самолеттан ҡаршы алыуын һорай. Ике аҙнанан һуң улар өйләнешә.

Был тарихта бөтөн күрһәтмәләр ҙә бар. Әгәр улар менән файҙаланғығыҙ килһә, ысынлап та һеҙ һайлаған кеше һәр саҡ эргәгеҙҙә булыуын теләйһегеҙме икәнен асыҡлағыҙ, сөнки был ысул бик көслө.

Кеше менән яҡынайыуҙың икенсе ысулы ла бар - ул көсөргәнештән арынып, ябай визуалләштереү менән бәйле. Уйығыҙҙа ғына ул кешене алдығыҙҙа баҫып тора тип күҙ алдына килтерегеҙ. Уның һул ҡолағына матур һүҙҙәр, уның менән дуҫ булырға йәки мөхәббәт мөнәсәбәтендә булырға теләүегеҙҙе әйтегеҙ.

Тән теле менән нисек башҡаларҙы ылыҡтырырға?

Һәр ҡайһыбыҙ башҡаларҙы ылыҡтырыуҙың ҡеүәтле ҡоралға эйә икәнен беләһегеҙме? Был ҡорал - өндәшмәү. Кәрәкле урында һәм урынлы өндәшмәү үҙ-үҙеңә ышанысты күрһәтә һәм тән теле менән берлектә тирә-яҡтағыларға көслө тәьҫир итеүе мөмкин.

Яҡынайыуҙа, ғәҙәттә, күҙҙәр ҙур роль уйнай. Психологтар, кеше ниндәйҙер яҡшы нәмә күрһә, уның күҙ ҡабағы киңәйә һәм, киреһенсә, насар нәмә булһа, ҡыҫыла, тип билдәләй.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Яу алдынан дошманлашыусы ике яҡтан алға сығарылған батырҙар көрәшендә черкес батырын еңеп, Алдар дан ала. Батша уға ике мәртәбә тарханлыҡ дәрәжәһе бирә.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТ ЮЛАЕВҠА АРНАП




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**22-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ихата. Хәкимов. Скелетон. Торт. Питон. Еҙем. Европа. Әҫәр. Тоҡсаба. Герб. Ижау. Лама. Ләмәҙе. Асы. Рауза. Ҡарт. Рига. Шәм. Алым. Етем.

**Вертикаль буйынса:** Пайтәхет. Ситдиҡова. Намаҙлыҡ. Хыял. Аманат. Егет. Хикмәт. Артыш. Әти. Әрме. Намыҫ. Урам. Алоха. Ете. Тимербулатов. Гомер. Таро. Буранбаева.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# БӨЙӨК РЕФОРМАТОРҘЫҢ...

## 350 йыллығы айҡанлы



**Пётр I Алексеевичты "Бөтә Рустең һуңғы батшаһы һәм Бөтә Рәсәйҙең тәүге императоры" тип атайҙар. Буласаҡ император 1672 йылдың 9 июнендә донъяға килә, һәм ун йәшендә батша тип иғлан ителә.**

Батшалыҡ итеүҙең тәүге йылдарында Пётр I Осман солтанаты һәм Ҡырым ханлығы менән һуғыш алып бара. Тап ошо осор беҙҙә нығыраҡ ҡыҙыҡһыныу уята, сөнки был һуғыштарҙа башҡорт яугирҙары әүҙем ҡатнаша. 1696 йылғы урыҫ-төрөк һуғышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән Алдар Иҫәкәевтең исеме тарихҡа инеп ҡалған. Алдар менән ҡуша был һуғышта ҡустыһы һәм ағаһы ла ҡатнаша. Яу алдынан дошманлашыусы ике яҡтан алға сығарылған батырҙар көрәшендә черкес батырын еңеп, Алдар дан ала. Батша уға ике мәртәбә тарханлыҡ дәрәжәһе бирә. Яуҙа ағаһының һәләк булыуын ишеткәс, батша батырға ағаһын тыуған еренә алып ҡайтып ерләү өсөн махсус ылау, аҙыҡ-түлек, аҡса, һаҡсылар бирергә бойора. "Тархану Алдарбаю Исакаеву - детям его, племянникам и внучатам - за бытие им Алдаром в Крымском и Азовском походах, и за три полученные им раны, также и за убийство сразившегося с ним Черкешанина, за поимку языка Крымчанина... и объявление Его Величеству блажения и вечной славы достойной памяти Государю Императору Петру Первому" (Из указа царства Российских", 1734 г.)

Пётр I Рәсәй батшаларынан тәүге булып Көнбайыш Европаға оҙайлы сәйәхәт ҡыла һәм унан әйләнеп ҡайтҡас, реформа эшен киң йәйелдерә. Рәсәй биләмәһен киңәйтеү - унын төп маҡсаттарының береһе, һәм Бөйөк Төньяҡ һуғышынан һуң Балтик буйындағы ерҙәрҙе Рәсәйгә ҡушҡас, 1721 йылда үҙен император тип иғлан итә. Пётр I реформалары күп, ҡайһыларын ғына атап китәйек: йәмғиәттең социаль төҙөлөшөн үҙгәртә, боярҙарҙы ҡыҫырыҡлай һәм яңы ҡатлам - дәүләткә генә хеҙмәт итә торған дворяндарҙы барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ сәйәси полицияны төҙөй.

Шведтар менән барған Төньяҡ һуғышта Ниеншанц ҡәлғәһен яулап алғас, шул тирәлә яңы ҡала төҙөргә фарман бирә. 1703 йылдың 16 (27) майында Санкт-Петербургҡа нигеҙ ташы һалына. Яңы ҡала һалыу тураһындағы фарманын биргәс, Пётр шундуҡ үҙ ҡулдары менән ағас өй төҙөргә тотона. Ул әле лә бар һәм ҡаланың символы булып тора. Өр-яңынан реставрация үткән "Еҙ һыбайлы" һәйкәле иһә императорҙың тыуған көнөндә ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарҙы сәләмләне.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА әҙерләне.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**12 июндә үтәсәк Рәсәй көнөнә, Салауат Юлаевтың тыуыуына 268 йыл тулыуға, Өфө ҡалаһына (ҡәлғәһе) нигеҙ һалыныуға 448 йыл тулыуға арналған рәсми, мәҙәни тамаша, киң күләм спорт һәм социаль-хәйриә саралары программаһын тәҡдим итәбеҙ:**




**Ленин урамында иртәнге 10-дан көндөҙгө 2-гә тиклем** "Байрамса Өфө" проекты сиктәрендә урам театрҙары фестивале үтәсәк; "Оҫталар ҡалаһы", "Өфө - йәштәр ҡалаһы", "Өфө - спорт ҡалаһы", "Өфө - уҡыусы ҡала" майҙансыҡтары, этнозона эшләйәсәк; һөнәрселәр йәрминкәләре; ағас скульптуралар конкурсының иң яҡшы эштәре күргәҙмәһе; ретро-автомобилдәр күргәҙмәһе ойошторолаcаҡ; Рәсәй көнөнә концерт программаһы күрһәтеләсәк; Ҡала көнөнә ҡарата бүләкләүҙәр тантанаһы уҙасаҡ; М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның студент йәштәре концерт программаһы менән сығыш яһаясаҡ.

**М. Ғафури исемендәге паркта иртәнге сәғәт 11-ҙән көндөҙгө 3-кә тиклем** "Әүҙем оҙон ғүмерлелек байрамы" проекты сиктәрендә йондоҙ менән зарядка, медицина һәм социаль консультациялар, 55 йәштән өлкәндәр өсөн шашка турниры; сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән граждандар өсөн ярыштар; оҫталыҡ дәрестәре ойошторолаcаҡ; сараны байрам концерты тамамлаясаҡ.

**"Ҡашҡаҙан" паркында "... тиклем ике аҙым" проекты сиктәрендә көндөҙгө сәғәт 3-тән төнгө сәғәт 11-гә тиклем** йәштәр бейеүе, Рэп, Рейв фестивалдәре ойошторла, шулай уҡ шоу программа; мультимедия фонтанын ебәреү; ҡала символы - Һыуһарҙың осоп килеүе күҙаллана. Байрам салют менән тамамлана

**В. И. Ленин һәйкәле артындағы майҙанда иртәнге сәғәт 11-ҙән көндөҙгө 3-кә тиклем** Өфө ҡала хакимиәте кубогына көрәш буйынса асыҡ турнир үтә.

**Иртәнге сәғәт 11-ҙә Беренсе Май паркында** Калинин районының мәҙәни-спорт программаһы башлана. **Сәғәт 12-лә** иһә Киров районының **Р. Бикбаев исемендәге паркында** "Тыуған ер таланттары" тип аталған байрам сараһы, Ленин районының "Тулҡын" паркында - "Шәжәрә байрамы", С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда Орджоникидзе районы коллективтарының "Рәсәй көнө!" тип аталған байрам программаһы, ә Якутов исемендәге паркта Совет районының байрам программалары башлана.

✓ *Бер нисә сит телдә өйрәнеү өсөн алты йыл етә, әммә тыуған телеңде өйрәнеүгә бер ғүмер ҙә етмәй...*

*(Вольтер).*



АФАРИН!

# ҠАЛА БАЛАЛАРЫНА ЛА...

## салғы сыңы таныш булһын



**Ауыл ерендә үҫкән һәр бала белә: бесән мәле - ҡулда салғы-һәнәктәрҙән ҡалған сөйәлдәр, эҫе көндә арҡа буйлап аҡҡан тир, күҙ-танауға тулыр саң ғына түгел, ул - урманда ҡайнаған мәтрүшкәле сәй ҙә, күңелле генә зыйтлап торор салғы сыңы ла, ауыр эш көнөнән һуң арбала ҡырын ятып, йырҙар көйләп барыу ҙа. Ғөмүмән, ауыл балаһы өсөн бесән мәле - күңелле лә, дәртле лә, иҫтә мәңге һаҡланыр бер осор! Ҡалала буй еткергән бала-саға был хистәрҙе аңламаҫ та кеүек. Әммә улар ҙа бит ауылда үҫкән ата-әсәләренең, йә йәштәштәренең көнитмешен белергә тейеш!**

Күптән түгел Өфө ҡалаһының 308-се Башҡорт балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүсе мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн "Салғы сыңы" тип аталған фольклор байрамы уҙғарылды. Сараны ойоштороусы тәрбиәселәр - Рәшиҙә Ғибәҙуллина, Регина Нартдинова, Рәмилә Абдрахманова ҡала балаларын бесән эше менән таныштырыуҙы ғына маҡсат итеп ҡуймай, ошо йәйге күңелле өмәнең халыҡ өсөн ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген, бесәнгә бәйле халыҡ ижады өлгөләрен - йыр-бейеүҙәрҙе лә өйрәтеүгә ҙур иғтибар бирҙе.

Кисә башында сараны алып барыусы өләсәй балаларға ямғыр шифаһы, йылдың уңышлы килеүе тап ямғыр муллығына бәйле булыуы тураһында һөйләп иштеттерҙе. Бесән ваҡытында ялан-урмандарҙа емеш-еләк тә ишелеп уңа бит әле! Балитәкле башҡорт милли күлдәктәрен кейгән ҡыҙҙар сиҙәк тотоп, еләк йыйыу күренешен һынландырған бейеү башҡарғансы, малайҙар ситтә тырма йүнәтте, салғы үткерләне. Малайҙарҙың ысын ир-егет булып үҫеренә, ҡыҙҙарҙың уңған килен булып буй еткерәсәгенә ишара ине был. Бейеү-йырҙар аша бесән эшләү серҙәренә өйрәнгән балалар түнәрәккә ултырып ял иткән арала йомаҡ та ҡойҙолар, мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрҙөләр, тиҙәйткес ҡабатланылар, хатта һыуһын ҡандырырға башҡорттар ятарып эскән әсемлек - айран да тәмләнеләр. Байрамға саҡырылған махсус ҡунаҡтар - "Аҡбуҙат" журналы хеҙмәткәрҙәре - Лариса Абдуллина, Миңлегөл Тайсина һәм Миләүшә Ғәйфуллина-Вәлиева балаларҙың зирәклегенә, оҫталығына, тырышлығына хайран ҡалды.

Башҡорт халҡының фольклор ынйылары - йырҙар, йомаҡтар, мәҡәлдәр юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Халыҡ эш менән булғанда, йә ауыр хеҙмәттән арып ял иткәндә уйлап сығарған уларҙы. Атабабаларыбыҙ шулай күңел асҡан, көндәлек эштәрен, хәстәрен йыр-моң менән сылатҡан. Тап шул халыҡ ижады өлгөләре аша үҫеп килгән йәш быуынға үткәндәрҙе аңлау, халҡыбыҙ көнитмешен тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыу еңелерәк бирелә, ти 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәселәре.

**Рәшиҙә ҒИБӘҘУЛЛИНА.**

ПАРСАЛАР

## Тупһала самауыр

Бәхетте һәр кем үҙенсә күрә, үҙенсә тоя, уның тураһында үҙенсә фекер йөрөтә. Был бәхәсле тема.

- Бына мин бәхет тураһында уйлаһам, һәр ваҡыт бала сағымдағы бер күренеш күҙ алдыма килә. Бәлки, ул һинә көлкө лә тойолор? - тип һөйләй әхирәтем Роза. - Бына мин мәктәптән ҡайтып киләм. Тышҡы тупһаны әсәйем шундай таҙа итеп ҡырып йыуған! Ә тупһаның иң өҫтөндә самауыр йырлап ултыра! Шул ваҡытта күңелемдә әйтеп аңлатҡыһыҙ илаһи тойғолар биләп алды. Минән дә бәхетлерәк кеше юҡ ине был мәлдә! - Роза бер аҙ тынып ҡалды. - Был минең атай-әсәйле сағым, туғандарым да әле таралмаған. Бөтәһе лә янымда. Был минең иң бәхетле мәлем! Хатта таҙанан- таҙа тупһа ла минең аҡ бәхетемдең бер кисәге ине!

## Бәхет нимәлә?

Ике ҡатын серләшә. Тәүгеһенең ике ҡыҙы бар, өсөнсөгә ауырлы: малай көтә. "Ирем малай һорай, - ти ул, - малай тапһам, тыныслап, бәхетле йәшәп китер инек". "Минең дә тәүге балам - ҡыҙ, улым тыуғансы, мин дә шулай уйлай торғайным. Иремә малай табып бирҙем, ә нимә үҙгәрҙе? Тормош шул көйө дауам итте, киреһенсә, мәшәҡәттәр артып, эштәр күбәйеп китте. Баланды ла ҡарарға кәрәк, иренә лә ярарға кәрәк", - тип көлдө икенсеһе.

Ысынлап та, бәхет малай йәки ҡыҙ табыуҙа ғынамы?

## Бүре лә тук, һарыҡтар ҙа иҫән

Раушан ағай бик тә китап уҡырға ярата. Китапхананан да, кешенән дә алып уҡый. Берәй ергә юл төшһә, ул һәр ваҡыт китап йәки журнал һатып алырға тырыша. Бындай мәлдәрҙә уға Сөйөмбикә еңгәнән эләгәә! Ул ирен ошо арҡала йыш битәрләй. Раушан ағайға ла гел генә һүҙ ишетеп йөрөүе еңел түгел. Ахыры, ул был ауыр хәлдән сығыр юлын тапты!

Һатып алған китабын ул иң тәүҙә ҡустыһына ҡалдыра. Уныһы үҙе уҡып сыҡҡас, ағаһына алып килә, йәки ағаһы үҙе барып "алып торған була". Бүре лә тук, һарыҡтар ҙа иҫән. Еңгә лә асыуланмай, ағай ҙа китаплы.

Тормош шулай үҙ яйы менән дауам итә.

## Шулай эшләй алыр инеңме?

Беҙҙең уттай эш мәлендә Өфөгә юлланыуыбыҙҙан файҙаланып, Асҡарҙан Радик ағай атыбыҙҙы кәбән ҡойоу өсөн һорап торҙо. Өйҙә ун өс йәшлек улыбыҙ Илдар һәм туғыҙ йәшлек ҡыҙыбыҙ Илүзә генә ҡалдылар. Кискеһен Радик ағай атты алып килгән һәм Илдарҙан иртәгәһе көнгә лә атты биреп тороуҙы үтенгән. Улым: "Ат Вил еҙнәмдең кәбәнен ҡойоу өсөн кәрәк", - тип бирмәгән. "Радик ағай атты алып килмәне, тип әйтерһең", - тигән Радик ағай. "Юҡ, мин ат ҡайта, тинем. Уларға уҡыу йылы башланыуҙан алда бесәнен эшләп бөтөргә кәрәк",- тип яуап биргән Илдар.

Беҙ Өфөнән ҡайтҡас, Радик ағай һөйләй: "Илдар миңә атты бирмәне. Шулай булһа ла ул миңә оҡшаны. Унда үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ тойғоһо бар, үҙ һүҙендә ныҡ тора. Маладис малай. Унынсы класта уҡыған улыма ла: "Быны һин шулай эшләй алыр инеңме?"- тип әйттем".

Әйе, ҡыйын булһа ла, үҙ һүҙенде әйтергә көс таба белергә кәрәк шул.

**Мәрйәм СӘЛМӘНОВА.**
**Әбйәлил районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЛАҢ ЯМАН БУЛҺА...

## әжәлең өйөндә булыр

Бәхетленең балаһы ун бишендә баш булыр, бәхетһеҙҙең балаһы утыҙҙа ла йәш булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер нисә сит телдә өйрәнеү өсөн алты йыл етә, әммә тыуған телеңдә өйрәнеүгә бер ғүмер ҙә етмәй...

**(Вольтер).**

Хәҙер бер генә нәмәгә лә ғүмерлеккә өйрәнеү мөмкин түгел. Замандан артта ҡалмаҫҡа теләһәң, һәр биш йыл һайын яңынан уҡырға тура киләсәк (Был һүҙҙәр 1809 йылда әйтелгән).

**(Иоганн Гете).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Берҙән-бер көндө Генри Форд тигән кеше Англияға килә. Ул бөтөн донъяға билдәле шәхес була, шуға ла уның Англияның был ҡалаһына килеүе тураһында ҡалалағылар ишетә, урамдарҙа уның ҙур фотоһүрәттәре эленеп тора, гәзиттәрҙә уның тураһында мәҡәләләр баҫыла. Генри Форд аэропортҡа килеп төшкәс тә, ундағы белешмәләр бюроһынан ҡалалағы иң арзанлы ҡунаҡхана тураһында белешә. Бюро хеҙмәткәре уны шунда уҡ танып ала. Был билдәле һәм бай кешенең иҫке генә плащ кейеүенә, етмәһә, иң арзанлы ҡунаҡхана тураһында белешеүенә тамам аптырап, бюро хеҙмәткәре унан:**

**- Яңылышмаһам, һеҙ бит Генри Форд әфәнде. Мин һеҙҙең фотоғыҙҙы күрҙем, йөҙөгөҙҙө яҡшы хәтерҙә ҡалдырҙым, - тип мөрәжәғәт итә.**

**- Эйе, һеҙ яңылышмайһығыҙ, мин - Генри Форд.**

**- Ни өсөн улай булғас һеҙ иң арзан ҡунаҡхана тураһында белешәһегеҙ, ни өсөн ошондай иҫке плащта йөрөйһөгөҙ? - тип аптырап һорай хеҙмәткәр. - Былар бит һеҙҙең дәрәжәгә тура килмәй. Мин һеҙҙең улығыҙҙы ла күрҙем, ул ҡалалағы иң яҡшы ҡунаҡханаға урынлашты, иң яҡшы кейемдә ине...**

**Йәш кешенең тупаҫ булһа ла ихлас һорауына ҡаршы Генри Форд шулай тип яуап бирә:**

**- Миңә ниндәй ҡунаҡханала урынлашһам да барыбер, сөнки мин ҡайҙа ғына урынлашһам да - Генри Форд. Ә минең улым әле бик йәш, тәжрибәһеҙ һәм үҙен бик ышаныслы тота. Арзанлы ҡунаҡханаға урынлашһам, минең турала кешеләр ни уйлар, тип ҡурҡа ул. Ә мин бер низән дә ҡурҡмайым һәм шикләнмәйем. Был плащ миңә, эйе, атайымдан ҡалды, уның иҫке йә яңы булыуы минең өсөн әһәмиәтле түгел, уның атайымдың төсө булып, миңә ҡалыуы мөһим. Шуға ла миңә яңы сепрәк-сапраҡ кәрәкмәй. Нимә генә кейһәм дә, хатта яп-ялан ғас йөрөһәм дә - мин Генри Форд. Башҡаһы мөһим түгел..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3387
Заказ - 714


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.